ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 февраль (шаҡай) 2024

№6 (1099)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡартлыҡтан көлөү - көлкө түгел...**



3

**Аҡсаның файҙаһын күр!**



6

**Комсомолда тәжрибә туплаған,**
мәҙәниәттә быуын нығытҡан



8-9

**Аҡ мыйыҡлы бабайға ла...**
барыбер ағай кәрәк...



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БАШҠОРТОСТАН ТАРИХЫН...



**2025 йылдың 1 сентябренән республикала тарих фәненә "Тыуған яғыбыҙ тарихы. Башҡортостан" тигән курс индерелә.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа Граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү, мәғлүмәт сәйәсәте һәм дин эштәре буйынса комитет ултырышында республикабыҙҙың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлетбирҙин ошо хаҡта хәбәр итте. "Хәҙер был бик мөһим, - тип белдерҙе ул. - Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының авторҙар коллективы һайлап алынған. 1 апрелгә тиклем "Тыуған яҡ тарихы. Башҡортостан" курсы буйынса дәреслектең ҡулъяҙмаһын күрһәтергә тейешбеҙ. Был курсты 2025 йылдың 1 сентябренән индереү ҡуҙаллана". Яңы фәндә бишенсе-етенсе класс уҡыусылары өйрәнә, тип асыҡлыҡ индерҙеләр "Башинформ"ға республиканың Мәғариф министрлығында.

## ҒАИЛӘЛӘРГӘ - ЯҠЛАУ

**Башҡортостанда ишле ғаиләләрҙе социаль яҡлау көсәйтелә. Республика парламентарийҙары тейешле закон проектын әҙерләй башланы.**

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, ҡануниәттә ҡаралған социаль ярҙам саралары күп балалы ғаиләләргә өлкән балаға 18 йәш тулғансы, әгәр ул көндөҙгө бүлектә уҡып икән, 23 йәшкә тиклем күрһәтелә. "Закон Рәсәй Президентының "Күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙам саралары тураһында"ғы Указына ярашлы әҙерләнә. Указда нығытылған положениелар ишле ғаиләнең критерийҙарын һәм граждандарҙың ошо категорияһы өсөн мотлаҡ социаль гарантиялар йыйылмаһын анығыҡ билдәләй (йәшәгән төбәгенә ҡарамай). Был илдең барлыҡ субъекттары өсөн дә мотлаҡ. Финанс мөмкинлектәре булған төбәктәр үҙ төбәк закондары менән өҫтәмә ярҙам сараларын индерергә мөмкин. Әлеге ваҡытта депутаттар республика Хөкүмәте менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Ғөмүмән, граждандарҙың ошо категорияһына социаль гарантиялар көсәйтелә", - тине спикер.

## КЕМ АЛИМЕНТ ТҮЛӘЙ?

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай беренсе уҡылышта Башҡортостан Республикаһының Ғаилә кодексына үҙгәрештәр индергән закон проектын ҡарай. Унда ир менән ҡатындың алимент буйынса бурыстары билдәләнә. Был хаҡта республика парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, үҙгәрештәргә ярашлы, уртаҡ бала тыуғандан алып өс йыл буйына бала тәрбиәләгән атай элекке ҡатынына алимент талап итергә хоҡуҡлы. Ғаилә кодексының ғәмәлдәге редакцияһына ярашлы, әлеге ваҡытта ҡатын-ҡыҙ ғына ошондай хоҡуҡҡа эйә. Шулай итеп, яңы ҡағиҙә ирҙәрҙең һәм ҡатындарҙың хоҡуҡтарын тигеҙләй.

Суд тәртибендә алимент талап итеү хоҡуғына ҡағылышлы башҡа положениеларға ла төҙәтмәләр индерелә. Хәҙер элекке ҡатын йөклө осорҙа алиментҡа иҫәп тота ала. Ләкин никах тарҡалғанға тиклем ауырға ҡалған осраҡта ғына, тип билдәләнә закон проектында. Шулай уҡ уртаҡ инвалид баланы ҡараған ир (элекке ир) ҙә алимент талап итергә мөмкин.

*УЙЛЫҒА - УЙ*

## БҮЛӘКТЕРМЕ, ҺЫНАУҘЫРМЫ...

**Яҡын ғына таныштарҙың ҡыҙы кейәүгә сығырға йыйына, бер нисә айҙан, егете отпускыға ҡайтҡас, ғариза бирергә һүҙ ҡуйыштылар. Тик шул мәлдә ҡыуанышып, ҡанатланып йөрөгән йәштәрҙең изге ниәтенә тотҡарлыҡ була яҙып ҡуйҙы.**

Хәҙер бит яңылыҡ йәшен тиҙлегендә тарала, улар интернеттан тормош ҡоророға йыйынған парҙарҙан генетик ярашлылыҡ хаҡында белешмә талап итеүе ихтималлығы хаҡындағы хәбәрҙе уҡып, аптырашта ҡалдылар: быны нисек аңларға һәм ул белешмә артынан ҡайҙа, күпме йөрөргә кәрәк буласаҡ? Уларға эйәреп, тағы бер нисә кеше бәйләнештә был хәбәрҙе ғәжәп ҡылып, комментарий яҙып һалды. Бәхеткәме, бәхетһеҙлеккәме - күп тә үтмәне, әлеге имеш-мимеш буйынса асыҡлыҡ индерелә һалды: БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев парламенттың был мәсьәләне ҡарарға йыйынмауы һәм тормош ҡороға ниәтләүсе парҙарҙан мотлаҡ генетик экспертиза хаҡында белешмә талап ителмәйәсәге хаҡында белдерҙе. "Беҙ кемдең был донъяға тыуасағын, ә кемдең юҡ икәнен хәл итә алмайбыҙ", - тине ул.

(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

*УҠЫҒЫҘ!*

## КИЛӘСӘГЕМ! АС ҺИН ИШЕГЕҢДЕ!

(Поэма)

*"- Киләсәгем!*
*Ас һин ишегеңде!*
*- Кем тупһамда?*
*Кемде күрәм мин?*
*- Танымайһыңмы әллә?*
*Мин ҡайттым бит!*
*- Ас тиҙерәк!*
*Был мин - Рәми..."*



(Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!" поэмаһын 10-11-се биттәрҙә уҡығыҙ).

12+

✓ *Нәҫелдән килгән сир, тигәндә, ете быуын ырыу тамырҙарын барлап, тикшереп, йә булмаһа улдарына кәләште алыҫ ырыуҙан әйттерә торған булған башҡорт халҡының боронғо йолаһы иҫкә төшә.*



*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ЙӘШ САҒЫҢДЫ...

## файҙалы үткәр!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Айтуған БАЙИСЛАМОВ, табип-ординатор, Өфөләге Ишембай йәштәре берлеге етәксеһе:*** Кешенең үҙ-үҙен үҫтереү, ныҡлы ғилем туплау осоро йәш саҡҡа тура килә. Мин Ишембай районы Эҭкол мәктәбендә, аҙаҡтан инде Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназияһында белем алдым. Ата-әсәйем дә, уҡытыусыларым да миңә дөрөҫ йүнәлеш бирә һәм минең булған көс-энергиямды кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтә алғаны өсөн ныҡ рәхмәтлемен. Үҙем холҡом буйынса ла тынғыһыҙ, эҙләнеүсән, тик тормаҫмын һәм гимназияла уҡығанда уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаларҙа, "Урал батыр" эпосын һөйләү буйынса конкурстарҙа, районда үткән сараларҙа әүҙем ҡатнаштым. Тырышлығым менән үҙем теләгән уҡыу йортона - Башҡорт дәүләт медицина университетына бюджет нигеҙендә уҡырға индем. Унда ла беренсе курста уҡ егеттәр менән берләшеп, вокал ансамбле төҙөп алдыҡ һәм алтынсы курсты тамамлағансы университеттың ғына түгел, ҡаланың бөтөн медицина учреждениелары үткәргән сараларҙа башҡортса йырлап йөрөнөк. Ошо мәлдә мин тағы ла ике университет тамамлап өлгөрҙөм, береһе - БР Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте идара итеү академияһы һәм икенсеһе - Бәләкәй идара итеү академияһы. Уларҙа белем алғанда дәүләт органдарында стажировкалар ҙа үттем.

Быларҙы мин үҙемде маҡтар өсөн әйтмәйем. Ҡайһы саҡта минең дә өйҙә генә телевизор ҡарап ятҡым килә, тик улай ярамай икәнен үҙем өсөн күптән хәл иткәнмен. Тор һәм үҙеңде үҙең өсөн файҙалы нәмә менән шөғөлләнергә мәжбүр ит - йәштәр өсөн кәңәшем шул. Студент саҡта ла "өлгөрмәйем" тигән һабаҡташтарыма хайран ҡалып ҡарай торғайным, һуң уларҙың күбеһенең уҡыуҙан башҡа шөғөлө лә булманы. Ваҡытыңды дөрөҫ бүлергә һәм өҫтөнлөктәрҙе дөрөҫ ҡуя белергә генә кәрәк. Йәш саҡта үҙемде үҫтереүгә шулай иғтибар бүлгәнемә ныҡ ҡыуанам. Егет кешегә 30 йәшкә тиклем өлгөрөп ҡалырға кәрәк, аҙаҡ эшләй башлағас ҡыйыныраҡ була. Әле эшләйем, ординатурала онкология йүнәлешендә уҡыйым, киләсәктә аспирантура бар әле. Униһы инде ғилми дәрәжә алыу өсөн кәрәк. Киләсәктә үҙемде онколог булып, пациенттарҙы ғына дауалап йөрөүсе итеп күрмәйем. Табип булып көнөнә 3-4 кешене дауалаһың, был да яҡшы, тик һаулыҡ һаҡлау эшен ойоштороу өлкәһендә хеҙмәт итһәң, халыҡҡа күберәк ярҙам килтерергә була, тип уйлайым.

Ишембай йәштәр берлеге етәксеһе булыуым да миңә тормошта ныҡ ярҙам итте. Бөгөнгө йәштәр хатта беҙҙән дә айырыла. Студент сағым 2016 йылдан башланды һәм беҙгә ул саҡта күмәкләп йыйылышып, танышып, саралар ойоштороп йөрөү ҡыҙыҡ ине. Беҙҙең әүҙемлек тә ошоноң менән билдәләнде. Әммә бөгөнгө 10-11-се класс уҡыусыларының, беренсе курс студенттарының ҡарашы икенсе, улар үҙҙәре өсөн ҡыҙыҡлы өлкәне алып, шул йәһәттән камиллашырға тырыша. "Һеҙ ни эшләп әүҙем түгел?" тиеү, "Концертҡа йөрөмәйһегеҙ", "Ҡурай уйнамайһығыҙ", тип әйтеү ҙә дөрөҫ түгелдер, быға уларҙың теләктәре лә юҡ. Улар менән башҡараҡ йүнәлештә эшләргә һәм һөйләшергә кәрәк. Әйтәйек, спорт ярыштары ойошторорға теләйбеҙ икән, киберспорт буйынса үткәрергә була. Уларға волейбол ҡыҙыҡ түгел, әммә улар компьютерҙы биш бармағы кеүек белә һәм ошо уҡ уйынды виртуаль уйнай ала. Башҡортостанды шул рәүешле күтәрә алалар икән, әйҙә, быға ҡыуанырға ғына кәрәк. Шуға ла йәштәрҙе әрләмәйек, заман менән бергә уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары ла үҙгәрә. Бары тик берҙәм булайыҡ һәм бер-беребеҙҙе күтәрмәләп йәшәйек. Һәм, мотлаҡ рәүештә, аҡыл менән эш итергә күнегәйек. Бөгөн тамаҡ ярып ҡысҡырғансы, аҡыл менән эш итеү ҡулайлыраҡ. Бынан милләтебеҙ уңасаҡ ҡына.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БҮЛӘКТЕРМЕ, ҺЫНАУҘЫРМЫ...

**(Башы 1-се биттә).**



Был ығы-зығы нимәнән килеп сыҡты һуң? Асыҡланыуынса, өйләнешергә йыйыныусыларҙың генетик ярашлылығы хаҡында мәсьәләне Дәүләт Йыйылышының Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитет ултырышында уның рәйесе Салауат Харрасов күтәреп сыҡҡан. Депутат һүҙҙәренсә, ҡайһы бер табиптар буласаҡ ғаилә парҙарына генетик экспертиза кәрәклеге тураһында башланғыс менән сығыш яһай. Был, улар фекеренсә, сабыйҙарҙың һәр төрлө нәҫелдән килгән сир менән тыуыу хәүефен бер аҙ сикләргә мөмкинлек бирер ине. Ошо ултырышта доклад менән сығыш яһаусы БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова был тәҡдимде шундуҡ кире ҡаға һәм бының, йомшаҡ итеп әйткәндә, әхлаҡһыҙлыҡ булыуын белдерә.

Эйе, бындай тәҡдимдән ҡыҙып китеп, уны хатта ки "ниндәйҙер фашизм" тип атаған министр үҙенсә хаҡлылыр ҙа, ләкин генетик экспертиза идеяһы ла бит һүҙ юҡта - һүҙ тигәндән, түшәмдән алып көн тәртибенә ҡуйылмаған. Шул уҡ ваҡытта зәғиф балалар тыуыуы илдә генә түгел, донъя кимәлендә лә арта бара һәм атаәсә аша бирелгән нәҫел сирҙәре берҙән-бер генә сәбәп тә түгел. Нәҫелдән килгән сир, тигәндә, ете быуын ырыу тамырҙарын барлап, тикшереп, йә булмаһа улдарына кәләште алыҫ ырыуҙан әйттерә торған булған башҡорт халҡының боронғо йолаһы иҫкә төшә. Халыҡ аҡылы - алтын шул: борон бер ырыуҙан булған ҡан ҡәрҙәштәр араһында никахлашыу ҡәтғи тыйылған. Табиптар фекеренсә лә бөгөн зәғиф балалар күберәк тап ана шул ҡан ҡәрҙәшлектәре булған ир менән ҡатын ғаиләләрендә тыуа ла инде. Министр Иванова әйтеүенсә, "инвалид балалар һаны арта, эйе, даими арта. Һәм улар араһында психикаһы менән нервылар системаһы боҙолған инвалид балалар өлөшө арта..."

Әйткәндәй, Рәсәйҙә 2023 йыл мәғлүмәттәре буйынса 11 млн инвалидтың 723 меңе - 18 йәшкә тиклемге балалар, ә шуларҙың 19 меңдән ашыуы Башҡортостанда йәшәй. Рәсәйҙең баш неонатологы, профессор Дмитрий Иванов раҫлауынса, илдә йыл һайын 25 меңгә яҡын сабый нәҫелдән бирелгән сир менән, атап әйткәндә, Даун синдромы һәм башҡа төрлө үҫеш тотҡарлыҡтары менән тыуа. Шул арҡала бәхетһеҙ ғаиләләр, тарҡалыусы никах һандары ла арта, ҡайһы бер ҡатындар зәғиф тыуған сабыйынан баш тарта... Башҡортостанда ғына ла йыл һайын ике меңгә яҡын инвалид бала тыуа, шуларҙың 10 проценты церебраль фалиж сиренә дусар.

Бындай балаларҙың донъяға килеүендә нәҫел факторынан тыш, сабыйҙың етлекмәй тыуыуы, әсә кешенең йөклө сағында йоғошло сир менән ауырыуы, генетик "хата"лар һәм башҡа ҡайһы бер

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ТЫЙЫРҒАМЫ? ӘЛЛӘ ТЫЙМАҪҠАМЫ?

**Бала яҡты донъяға килгәс, уның атаәсәһе, олатаһыөләсәһе, башҡа туғандары сикһеҙ шатлана. Шул көндән башлап йәш балалы һәр ипле ғаиләлә тик бер принцип өҫтөнлөк ала: "Бар шарттар - сабый өсөн, таҙа һәм матур булып үҫһен өсөн!"**

Бәпес йоҡлағанда башҡа балалар ҙа артыҡ шаулашмаҫҡа тырыша. Бала үҫә килә уға аҙлап-аҙлап булһа ла билдәле бер талаптар ҡуйыла башлай. Ул әйткәнде тыңламай, ҡарыша, үҙһүҙләнә башлай икән - тәүге тыйыуҙар, хатта ки уға бәғзе бер көслөрәк тәьҫир итеү саралары ҡулланыла. Һис йәшерен-батырын түгел, ҡайһы бер ата-әсәләр балаларын тыңлата алмаған осраҡта тауыш күтәрәләр, уҫалыраҡ һүҙҙәр әйтәләр, бәргесләп тә ебәрәләр, йә иһә сыбыҡ-ҡайыш менән ҡурҡыталар. Торабара тыйыуҙар арта бара, улар менән бергә баланың эмоциональ халәтен кире, негатив, хатта агрессив хис-кисерештәр билдәләй.

Шулай бер йәш әсә минән кәңәш һораны: "Баламды тыя башлаһам, ул миңә ҡулы менән киҙәнә, һуғып та ебәрә, ни эшләргә инде?" - ти. Психолог яуабы: бала агрессивлыҡ күр-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Радий Хәбиров аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа асылған һәйкәлгә ҡарата үҙ фекерен белдерҙе. "Һәйкәл яҡшы килеп сыҡты. Был беҙҙең хөрмәт билдәһе. Мин төҙөүселәргә һәм скульптор Салауат Александровичҡа рәхмәтлемен. Алдан һөйләшкәнсә, быйыл һәйкәл ҡуйылған паркты төҙөкләндерә башлайбыҙ. Унда тәртип урынлаштырырға кәрәк", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Рәсәй Президенты вазифаһына һайлауҙа ЛДПР-ҙан Леонид Слуцкий, КПРФ ағзаһы Николай Харитонов, үҙ-үҙен тәҡдим иткән ғәмәлдәге ил башлығы Владимир Путин һәм "Яңы кешеләр" партияһы вәкиле Владислав Даванков ҡатнаша. Үҙәк һайлау комиссияһы башҡа кандидаттарҙы, шул иҫәптән Сергей Малинковичты ("Рәсәй коммунистары"), Борис Надеждинды ("Граждандар башланғысы") һәм Рада Русскихты теркәүҙән баш тартты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, тауыш биреү 15 марттан 17-һенә тиклем бара.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров күп балалы әсәләрҙе "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указда билдәләнеүенсә, почетлы наградаға 24 муниципалитеттан биш һәм унан күберәк бала үҫтергән 50 ҡатын-ҡыҙ лайыҡ булған. Улар араһында Әбйәлил, Әлшәй, Ауырғазы, Баймаҡ, Бишбүләк, Бөрйән, Ғафури, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Краснокама, Күгәрсен, Кушнаренко, Мәләүез, Мәсетле, Салауат, Стәрлетамаҡ, Тәтешле, Туймазы, Өфө, Учалы, Хәйбулла, Шишмә районларынан һәм Өфөнән әсәләр бар.

✓Башҡортостан "Бөтә ғаилә менән" проекты еңеүселәре буйынса Рәсәйҙең биш төбәге иҫәбенә инде. Билдәле булыуынса, республикабыҙҙан 209 кеше финалға сыҡҡан. Бынан тыш, Башҡортостан конкурста ҡатнашыусылар һаны буйынса өсөнсө урынды биләй. "Бөтә ғаилә менән" проектында ҡатнашыусылар аҙнаһына бер тапҡыр ғаилә менән төрлө эштәр башҡара. Проектта ҡатнашыу өсөн проекттың төркөмөнә яҙылырға, теркәлергә, эште башҡарырға һәм #всейсемьей #всейсемьей02 хештегтары менән фото һалырға кәрәк. Иң әүҙем ғаиләләр Рәсәй буйлап сәйәхәттәр һәм башҡа ҡиммәтле бүләктәр оторға мөмкин.

*✓ Украина тураһында Рәсәй Президенты Карлсонға әңгәмә аҙағында ла әйтте: һуғышты туҡтатыу тураһында килешеүҙәр башларға ваҡыт етте, сөнки Көнбайыш властары Рәсәйҙең яу ҡырында еңелеү белмәйәсәген аңланы.*



билдәһеҙ сәбәптәр бар, ти табиптар. Тик барыбер, уйлап ҡараһаң, шулай уҡ билдәһеҙме сәбәптәр? Ә экология касафаттары, аҙыҡ-түлек сифатының хәүефле сиктәргә яҡынайыуы, эскелек, тәмәке, наркомания, ВИЧ? Быларҙан тыш, ата-әсәнең үҙҙәренең сәләмәтлек торошо ла буласаҡ бала һаулығына тәьҫир итә. Мәҫәлән, шулар иҫәбендәге яман шеш, йөрәк-ҡан тамырҙары, шәкәр сирҙәре иң хәүефлеләре. Табиптарҙың ҡайһы берҙәре ҡатын-ҡыҙҙарҙың бала табыу осорон күрәләтә кисектереүе лә йөклөлөктөң һәм бала тыуҙырыуҙың ауыр үтеүе, шул арҡала сирле балалар донъяға килеүе хаҡында белдерә.

Федерация Советының Социаль сәйәсәт буйынса комитеты ағзаһы, балалар табибы Владимир Круглый, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа ғына ла һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән (ОВЗ) балаларҙың 9,4 процентҡаса артыуын медицина диагностикаһының яҡшырыуы менән аңлата, әлбиттә. "Аутизм сирен асыҡлауы хәҙер еңелерәк, - ти ул,- яңы ҡараш, яңы ысулдар. Элегерәк иһә бындай диагнозды һирәк ҡуялар ине. Медицина үҫешә бара, балалар үлеме лә кәмей һәм етлекмәй тыуған (500 гр) сабыйҙар терелеп китә, ләкин тап бына улар араһында зәғиф балалар күберәк килеп сыға ла инде..." Тик бына мәсьәләнең социаль сәбәптәрен депутат табип ни өсөндөр фәҡәт һуң йәштә бала табыусы ҡатындарҙа күрә. Тәбиғи, һорау килеп тыуа: ә ул ҡатын ниндәй тормош рәүеше алып бара, йәшәү шарттары ниндәй, ҡайҙа эшләй, ире, фатиры бармы, эш хаҡы күпме, бала көтөп алынамы, әллә осраҡлы йөклөлөкмө һәм башҡа бик күп мәсьәләләр шулай уҡ сәләмәт сабый тыуыуында ҙур әһәмиәткә эйә. Нисек кенә булмаһын, ОВЗ менән тыуған балалар һаны ошоға тиклем дә һәр ваҡыт күп ине, әле лә ул кәмемәй. Мәҫәлән, аутизм элегерәк һәр 88-се балала асыҡланһа, бөгөн - һәр 20-лә.

Табиптар диагностикалауҙың яҡшырыуынан тыш, прогресс эҙемтәһен дә телгә алып китә. Мәҫәлән, пластиктағы фталаттар һәм бисфенолдарҙың бала үҫешенә туранан-тура йоғонтоһо бар, ти улар. Шуның өсөн әсәләргә балаһы имеҙгәндә пластик шешәләр ҡулланырға ярамай. Табип был хаҡта өндәшмәһә лә, уның урынына еткереберәк шуны әйтке килә: ниндәй генә хәлдә лә сараһын табып, әсә сабыйын тәү минутта уҡ күкрәгенә ҡыҫып, имсәк һөтөн имеҙергә бурыслы.

Мәҡәлә темаһына ҡағылышлы йәнә бер ҙур мәсьәлә бар. Буласаҡ әсә ауырға ҡалғандан һуң 11-12 аҙналыҡ мәлендә йөклөлөк барышы, сабый яралғыһының камиллығына махсус анализ тапшырып, тикшерелеү үтә. Яралғылағы патология билдәләрен УЗИ-скрининг ярҙамында ла асыҡларға була. Яралғы үҫешен йөклөлөк осоронда шулай өс тапҡырғаса күҙәтергә мөмкин. УЗИ-картинала Даунды ла, ниндәйҙер ағзаларҙың етешмәүен дә, баш күләмен дә, гидроцефалия һәм башҡа билдәләрҙе лә асыҡ күрергә була, ти табип-генетик, БДМУ профессоры Сәлиә Мырҙабаева. "Нәҫелдән биреләүсе сирҙәрҙе иҫкәртеү, уларҙы мөмкин тиклем иртәрәк асыҡлау беҙҙең медицина-генетик хеҙмәте эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше булып тора. Ошоға ҡағылышлы һорауҙар менән һәр ваҡыт беҙҙең Медицина-генетик үҙәккә мөрәжәғәт итергә мөмкин", - ти профессор. Үҙәктә йыл һайын 900-ләп яралғы патологияһы асыҡлана. Бындай осраҡтарҙа яралғыны һаҡлап ҡалыуҙы, йә иһә табиптар күрһәтмәһе буйынса йөклөлөктө өҙөү мәсьәләһен фәҡәт ғаилә ағзалары хәл итә. Үкенескә күрә, табиптар әйтеүенсә, ҡайһы бер сирҙәрҙе, мәҫәлән, айырыуса ДЦП-ны алдан иҫкәртеү мөмкин дә түгел. Ундай зәғифлек күбеһенсә етлекмәй тыуған балаларҙа йә булмаһа, ЭКО ярҙамында йөккә уҙған һәм әсә ҡарынында йоғошло сиргә дусар булған осраҡта бала тыуғандан һуң ғына асыҡлана. Ә инде сабый донъяға яр һалып тыуған икән, уның һаулығы ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, ул ата-әсә өсөн иң ҡәҙерле бүләк. Һәм, бәлки, һынауҙыр ҙа. Аллаһы Тәғәлә һынауы...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

һәтә, йә иһә киҙәнә икән, уның ошо ҡулын йомшаҡ ҡына итеп тотоп алып, башынан иркәләп һыйпарға ла, "Эй, балаҡайым, мин һине яратам бит, һин дә мине яратып алсы әле, башымдан һыйпап", - тип әйтергә кәрәк. Иркәләүҙе үҙһенмәгән бала юҡ ул, был тәрбиә процесының бик көслө алымы.

Тыйыуға килгәндә, унһыҙ ҙа булмай, ул урынлы, нигеҙле булырға тейеш һәм уны һирәгерәк, үлсәберәк ҡулланыу зарур. Ни өсөн? Сәбәптәре байтаҡ уның.

- Тыйыу йыш ҡына балала негатив эмоциялар тыуҙыра, хатта истерик хәлгә еткерә.
- Бала менән оло кеше араһында эмоциональ көсөргәнешлек хасил була, ә был артабан конфликтлы ситуацияларға килтерә.
- Тыйыуҙарҙы йыш ҡулланған хәлдә баланың үҙ баһаһы түбәнәйә бара, ә был артабан уның шәхесендә кәмһенеү комплексын барлыҡҡа килтерә.
- Бары тыйылған булыуы арҡаһында ғына ниндәйҙер ғәмәлдәрҙән баш тартҡан бала үҙен-үҙе тыя алыу кимәленә күтәрелә алмай. Башҡалар белмәһә-күрмәһә, тыйылғанды эшләп, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерә.
- Тыйылған нәмәләр баланы ныҡ ымһындыра, уларға эйә булыу теләге һүнмәй, ул нисек итеп булһа ла (мәҫәлән, алдау, йәшерен рәүештә) ниәтенә өлгәшергә тырыша: тыйылған ғәмәлдәр ләззәтлерәк тойола.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәрбиә эшендә йыш тыйыуҙан тыйылыу зарур. Ошондай мөхиттә балалар саманан тыш баҫалҡы, дәртһеҙ, инициативаһыҙ булып үҫә, ә был уларҙың артабанғы яҙмышына, һөнәри карьераһына кире йоғонто яһай. Иң мөһиме - баланы үҫә барған һайын үҙ тормошонда үҙаллы фекерләргә, әхлаҡ һәм йәмғиәт ҡағиҙәләрен аңлы рәүештә үтәргә өйрәтеү отошлораҡ.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҠАРТЛЫҠТАН КӨЛӨҮ - КӨЛКӨ ТҮГЕЛ...



**Үткән аҙнаның донъя киңлегендә шаңдау алған ваҡиғаларының береһе Рәсәй Президенты Владимир Путиндың АҠШ журналисы Такер Карлсон менән әңгәмәһе булды. Был ваҡиға бөтөн илдәрҙең дә киң мәғлүмәт сараларында үҙәк урын алды. Европала хатта уны "мәғлүмәти бомба", "медиа-блокаданы йырыу" тип тә атай һалдылар.**

Тәүгеләрҙән булып был хаҡта АҠШ президентлығына кандидат Роберт Ф.Кеннеди үҙ фекерен белдерҙе: "Американдар уйланырға мәжбүр итеүсе әңгәмә алып барырға һәләтле. Беҙ "хәүефле" тип иҫәпләнгән фекерҙәрҙе лә, рәсми мәғлүмәт саралары ҡарашына тап килмәгән идеяларҙы ла тыңлай алабыҙ", - тип яҙа сәйәсмән үҙенең социаль селтәрендәге диуарында һәм Карлсонға ҡарата иҫкесә фекерләүсе мәғлүмәт саралары менән демократтар тарафынан ойошторолған яла яғыуҙарҙы журналистың үҙ эшен башҡарғаны өсөн генә ғәйепләү тип белдерә.

Америка миллиардеры Илон Маск иһә Путиндың "Штаттар долларҙы баҫым яһау инструменты һәм ҡорал итеп файҙалана", тигән һүҙҙәре менән килешеүен белдерҙе. "Беҙ долларҙы ҡоралға әйләндереп, үтә ныҡ шаштырып ебәрҙек", - ти ул. Һәм, ғөмүмән, үҙен "йыһан ғәли йәнәптәре" бейеклегендә тойған был миллиардер һуңғы ваҡыт ергә яҡыная төшкәндәй. Ошо көндәрҙә генә ул, Джо Байден, Эммануэль Макрон һәм Олаф Шольцтың отоласағы, ә Ҡырым менән Донбастың Рәсәйҙеке булып ҡаласағына шик белдермәүен әйтте. Украинаға финанс ярҙамы хәлде үҙгәртмәйәсәк, был бары тик конфликтты һуҙасаҡ һәм 100 меңләгән Украина граждандарын һәләкәткә илтәсәк, тине Илон Маск. Был бизнесмендың Америка властары тарафынан һаман да булһа Украина сиктәрен һаҡлау өсөн 300 млн доллар бүлеү ниәтенә ҡағылышлы фекере ине.

Әммә Карлсондың бөтөн мәғлүмәт сараларын шаулатҡан әңгәмәһенә ҡарата Аҡ йорттан бер ниндәй ҙә фекер белдерелмәне. Уның ҡарауы, Карлсондың Путин менән әңгәмәһе сәйәсәт күгендә күптән инде һүнеп-онотолоп бөткән "нафталин" ханым Хиллариҙың ҡанын ныҡ ҡайнатты. Ул хатта ҡасандыр президентлыҡҡа экс-кандидат булараҡ та, исмаһам, үҙен әҙәплерәк тота алманы. Әйтеүҙәренсә, шул осорҙағы һайлауҙар замынында уҡ Карлсон Хиллари ханымға "тейешле хөрмәт" күрһәтмәгән икән. Әйтергә лә түгел, Хиллари үс һаҡлай һәм уны ҡайтарыу сәғәтен көтә лә белә булып сыҡты. Сәбәп килеп сығыуҙан файҙаланып, Хиллари журналисты "идиот", "көсөк" тип атауҙан да тартынманы.

Ә шулай ҙа сикһеҙ ярһыған һәм олоғайып киткән был ханымдан айырмалы рәүештә, уның ватандаштары, йәғни Такер Карлсондың ҡәләмдәштәре, был әңгәмәне бер ни тиклем объектив кимәлдә аңлай алған. **New York Times** баҫмаһы яҙыуынса, Путин был әңгәмәһендә Украина менән ҡаршылыҡ сиселешенә ҡарашын ғәҙәттәгенән турараҡ әйтеп бирҙе: ул хәрби еңеү түгел, ә Көнбайыш менән килешеүгә баҫым яһай. Был хаҡта Рәсәй Президенты Карлсонға әңгәмә аҙағында ла әйтте: һуғышты туҡтатыу тураһында килешеүҙәр башларға ваҡыт етте, сөнки Көнбайыш властары Рәсәйҙең яу ҡырында еңелеү белмәйәсәген аңланы.

Ғәрәп киң мәғлүмәт саралары журналистары Путиндың Карлсон менән әңгәмәһен юғары баһаланы. Билдәләүҙәренсә, Америка хәбәрсеһе теләһә ниндәй журналисты ла көнләштерә алырлыҡ аҙым яһаны. Украинала Махсус хәрби операция башланғандан алып, был Рәсәй Президентының тәүге мөһим интервьюһы, тип яҙа **Al Arabiya һәм Al Hadath** каналдары директоры Мәмдүх әл-Мухаини.

Ә бына, зәғифтән көлмәгеҙ, ҡартлыҡтан көлөргә лә була, тигәндәй, АҠШ президенты Байден үҙенең сығыштарында яҙа һөйләп, кеше көлдөрөп йөрөүен дауам итә. Бер уйлағанда, көлкөнән бигерәк ҡыҙғаныс һәм хатта хәүефле лә был: тотош держава башында тороусы лидер буталанған баш менән ниҙәр эшләмәҫ, Аллаһ һаҡлаһын! Байден үҙенең президент булып һайланғандан һуң, йәғни 2021 йылда, 1996 йылда уҡ гүр эйәһе булған мәрхүм Франсуа Миттеран менән осрашыуы хаҡында әйтеп һалды. Күрәһең, ул Францияның әлеге етәксеһе Макронды... Миттеран менән бутаны. Американдар бөгөн сәйәсмәндәрҙең үҙ сығыштарында ошондайыраҡ хаталар ебәреп, уңайһыҙ хәлгә ҡалыуҙарынан көлөп, "байденизм" тигән термин да уйлап сығарған, ти, гонаһ шомлоғо!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Стәрлетамаҡ районы советы депутаттарының бер тауыштан ҡабул иткән ҡарары менән Рита Сәмиғуллина муниципалитет хакимиәте башлығы итеп һайланды. Был хаҡта республиканың власть органы ултырышы йомғаҡтары буйынса билдәле булды. Бынан алдараҡ ул Евгений Волков үҙ теләге менән ваҡытынан алда вазифаһын ҡалдырғандан һуң Стәрлетамаҡ районы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнгәйне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рита Сәмиғуллина - Башҡортостанда муниципалитет етәксеһе вазифаһын биләгән дүртенсе ҡатын-ҡыҙ.

✓ 20-21 февралдә Мәскәүҙә "Рәсәй" халыҡ-ара күргәҙмәһендә Башҡортостан Республикаһы менән идара итеү үҙәге көндәре үткәрелә. Был хаҡта республиканың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева хәбәр итте. Күргәҙмә барышында Башҡортостан стендында шулай уҡ республика телевидениеһы, һаулыҡ, фән, студенттар көндәре һәм башҡа саралар ойошторола.

✓ Екатеринбург ҡалаһында Рәйлә Ибраһимова етәкселегендә "Күгәрсен" башҡорт һәм татар фольклор өлгөлә ансамбле 1992 йылдан эшләп килә. "Йырлы һүҙ" проекты сиктәрендә Рәйлә Абдулла ҡыҙы башҡорт телендә музыка дәрестәре уҙғара. Быларҙың барыһы ла Башҡортостан Башлығы Гранты фонды ярҙамында бойомға ашырыла. Ошо көндәрҙә ансамбль урынлашҡан 167-се һанлы урта мәктәптә "Күгәрсен"дә шөғөлләнгән балалар "Ҡарға бутҡаһы" байрамын сәхнәләштерҙе. Мәктәп фойеһында уҡыусыларҙың ошо темаға арналған рәсемдәр күргәҙмәһе ойошторолдо.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Дәүләт Думаһына Рәсәй Хеҙмәт кодексының 179-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында закон проектын тәҡдим итте. Документ Дәүләт Думаһы рәйесенә ебәрелде. Закон проектында хеҙмәткәрҙәрҙе йәки штатты ҡыҫҡартҡанда эш урынын һаҡлап ҡалыу хоҡуғына эйә булғандар исемлегеН пенсия алды йәшендәгеләр (хаҡлы ялға тиклем биш йәки унан да аҙыраҡ ваҡыт ҡалһа) менән тулыландырыу күҙ уңында тотола. Был уларҙың эшен юғалтҡан осраҡта артабан эшкә урынлашыу мөмкинлеге аҙ булыуы һәм пенсияға дәғүә итә алмауы менән аңлатыла.

*✓ Педагогтарҙың торлаҡҡа хоҡуғын бойомға ашырыуҙы тәьмин итергә кәрәк, тип иҫәпләй депутаттар. Бындай ҡарар уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәрергә мөмкинлек бирер ине.*



ҠЫҪҠАСА

# ИҒТИБАР ТОЙҺОНДАР

**Быйыл иғлан ителгән Һаулыҡ мөмкинлектәре сикле кешеләр хаҡында хәстәрлек йылында 153 сара үтәсәк тип билдәләнә республика Хөкүмәте ҡабул иткән планда.** Республиканың хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Ленара Иванова әйтеүенсә, был саралар 9 төркөмгә бүленгән. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәргә социаль ярҙам күрһәтеү өлкәһендәге ҡануниәтте камиллаштырыу буйынса махсус төркөм төҙөлгән, кәрәкле мәғлүмәт һәр кемгә барып етһен өсөн аңлатыу эштәре лә алып барыласаҡ. "Социаль такси", инклюзив автобус турҙары, белгестәр өсөн семинарҙар, инвалидтарға һөнәр үҙләштерергә һәм артабан эшкә урынлашырға ярҙам итеү, махсус белем усаҡтарында полиолимпиадалар үткәреү - былар барыһы ла һаулыҡ мөмкинлектәре сикле кешеләрҙең йәшәйешен яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Шулай уҡ Өфөлә һөнәр үҙләштереү йүнәлешендә эшләгән учреждениелар, реабилитация үҙәктәре, Әлшәй районында пансионат асылыуы көтөлә.

✓ **Дәүләт Думаһы советы Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустинға торлаҡҡа мохтаждар сифатында иҫәптә торған уҡытыусыларҙың социаль ҡуртым килешеүе буйынса сираттан тыш торлаҡ алыуға хоҡуғын тормошҡа ашырыу механизмын әҙерләү тәҡдиме менән мөрәжәғәт итергә ҡарар итте.** Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, педагогтарҙың социаль ҡуртым килешеүе буйынса фатир алыуға хоҡуғы мәғариф тураһындағы закон менән нығытылған, әммә уны ғәмәлгә ашырыуҙың аныҡ механизмы һаманғаса билдәләнмәгән. Дәүләт Думаһына ил субъекттарынан педагогик хеҙмәткәрҙәргә ярҙам саралары тураһында тәҡдимдәр менән мөрәжәғәттәр килә, шул уҡ ваҡытта профилле министрлыҡтарҙың был мәсьәлә буйынса килешелгән фекере юҡ. Педагогтарҙың торлаҡҡа хоҡуғын бойомға ашырыуҙы тәьмин итергә кәрәк, тип иҫәпләй депутаттар. Бындай ҡарар уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәрергә һәм белем биреү өлкәһенә яңы кадрҙар йәлеп итергә мөмкинлек бирер ине.

✓ **Президент указы буйынса 2024 йылда Рәсәйҙә илдең фәнни-технологик үҫеш өҫтөнлөктәрен ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә ғилми тикшеренеүҙәр алып барған аспиранттар һәм адъюнкттар өсөн стипендиялар булдырыла.** Стипендия тәғәйенләү һәм түләү тәртибе тураһындағы ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Документтан күренеүенсә, стипендиялар, көндөҙгө уҡыу ваҡытына ҡарап, йыл һайын конкурс һайлауҙары һөҙөмтәләре буйынса 1 йылдан 4 йылға тиклем бирелә. Һәр берәһенең күләме - айына 75 мең һум. Түләүҙәр федераль бюджеттан финанслана. Стипендия алыу өсөн кандидаттарҙы уларҙың ғилми етәкселәре күрһәтергә, ә стипендиаттар тураһында ҡарарҙы конкурс һайлап алыуы һөҙөмтәләре буйынса Стипендия тәғәйенләү һәм түләү мәсьәләләре буйынса совет ҡабул итергә тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺӨҘӨМТӘҺЕ БУЛҺЫН



**Үткән аҙнала Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Беларусь Республикаһында эш сәфәре менән булды.**

"Беларусь менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса эште дауам итәбеҙ, был беҙҙең өсөн төп партнер, - тине Радий Хәбиров Минск аэропортында журналистарҙың һорауҙарына яуап итеп. - Был юлы ла беҙ бизнес-миссия менән килдек. Уның составында яңы партнерҙар эҙләгән 54 компания бар. Өс ҙур килешеү төҙөргә әҙер булырбыҙ, моғайын. Машиналар эшләү өлкәһендә МАЗ заводын төҙөү - МАЗ-дың һәм Өфө трамвай-троллейбус заводының берлектәге проекты, аккумуляторҙар етештереү буйынса завод төҙөлөшө беҙҙе бик ҡыҙыҡһындыра. Әлбиттә, "Амкодор-Алға" проекты. Шулай уҡ беҙ бында башҡа, шул иҫәптән мәҙәниәт һәм туризм өлкәһендәге мәсьәләләрҙе лә тикшерәсәкбеҙ".

Сәфәр барышында Башҡортостан Башлығы Беларустың бер нисә компанияһы менән эшлекле һөйләшеүҙәр үткәрҙе, Беларусь премьер-министры Роман Головченко менән ике республиканың бизнес-форумында ҡатнашты, шулай уҡ "Амкодор" машиналар эшләү компанияһында булды. Ул Өфөлә төҙөлә башлаған "Амкодор-Алға" заводында сығарыласаҡ техниканы ҡараны. "Беҙ "Амкодор"ҙың бер предприятиеһын астыҡ, унда ашлыҡ киптергестәр етештерелә. Хәҙер артабанғы, ҡатмарлыраҡ проект өҫтөндә эшләйбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Беларусь дәүләт Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы филармония һәм Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы менән мәҙәниәт өлкәһендә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу тураһында килешеүгә өлгәшелде. Уртаҡ белем биреү проекттары Өфө сәнғәт училищеһы һәм Минск дәүләт сәнғәт колледжы араһында төҙөлгән хеҙмәттәшлек килешеүе нигеҙендә тормошҡа ашырыласаҡ. Бынан тыш, рәсми сәфәр көндәрендә "Ҡунаҡсыл Башҡортостан" фестивале ойошторолдо.

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘБЕҘ!



**Башҡортостанда Владимир Путиндың тәҡдиме менән башланған "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү эштәре 2024 йылдың 1 майынан башлана. 1 апрелгә сауҙалашыуҙар тамамланырға тейеш. Республика етәксеһе үҙенең телеграм-каналында ошо хаҡта белдерҙе.**

Быйыл 123 йәмәғәт биләмәһе яңыртыла, 67 объект - ҡалаларҙа, 56-һы иһә ауылдарҙа, тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров. Барлыҡ проекттарҙы ла халыҡ былтыр яҙ көнө онлайн-тауыш биреү ярҙамында һайланы. Ҡайһы бер парктар һәм скверҙар тулыһынса яңыртыла. Өфөнөң Урмансылар паркын күләмле реконструкция көтә. Биләмәләрҙең бер өлөшөндә төҙөкләндереү эштәре алдан уҡ башланғайны. Мәҫәлән, Мәләүездә быйыл "Дан" мәҙәниәт һәм ял паркында эштәр дауам итә. "Мин республика буйлап күп йөрөйөм, сағыштырырлыҡ нәмәләр бар. Беҙҙең ҡалалар һәм ауылдар үҙгәрә, яңы парктар, аллеялар, скверҙар барлыҡҡа килә, халыҡтың яратҡан ял урындары күркәмләнә. Һуңғы биш йылда "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса Башҡортостанда 683 объектты төҙөкләндерҙек. Проект өсөн бүленгән 7 миллиард һумдың 91 проценты - федераль бюджеттан. Ә был карточкаларҙа - быйыл ғәмәлгә ашырылырға тейешле проекттар. Минеңсә, бик шәп", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

# БАЙЛЫҠҠА КЕМ ХУЖА?

**Башҡортостанда ер хужаһының рөхсәтенән тыш алтын һәм башҡа ҡиммәтле ресурстарҙы эҙләү һәм эшкәртеүгә лицензия бирмәйәсәктәр. Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов билдәләүенсә, ведомство федераль регламентта ҡаралмаған күп кенә үҙгәрештәргә нигеҙ һалған.**

БР Башлығы тарафынан булдырылған ведомство-ара комиссия физик һәм юридик шәхестәрҙең законды нисек үтәүен тикшереп, әлеге ваҡытта алтын табыуға бирелгән лицензия хужаларының эшмәкәрлегенә тәртип индереү менән шөғөлләнә. "Алтын табыу цивилизациялы булырға тейеш. Әле алтынды эҙләү территорияһы сикләнмәгән, траншеяны 100 квадрат километрға тиклем ҡаҙһалар ҙа була. Урындағы халыҡ был ерҙәрҙә алтын эҙләйәсәктәрен белмәй ҙә ҡала. Әгәр ҙә уларҙы ярты йыл элек үк иҫкәртһәләр, һөйләшеү икенсерәк барыр ине, моғайын. Ә былай ниндәйҙер кешеләр килә лә, ерҙе ҡаҙа башлай кеүек күренә", - тине Фазылов.

Комиссия эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә алтын эҙләүселәргә тәбиғәткә зыян килтергән өсөн суд тарафынан 35 млрд һум штраф һалынған. Яңыраҡ арбитраж суд тарафынан "Альтинвест" ойошмаһының эшмәкәрлеге туҡтатылды.

# СПОРТ БАЙРАМДАРЫ



**Башҡортостанда Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө сиктәрендә уҙғарылған спорт саралары башланды.**

Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл спорт байрамының төп майҙансыҡтары - Әлшәй, Ишембай, Өфө һәм Учалы райондарында, шулай уҡ Өфөнөң Киров районында. Был майҙансыҡтарҙа коньkиҙа шыуыу спорты, шайбалы хоккей, биатлон, саңғы ярыштары һәм башҡа спорт төрҙәре буйынса турнирҙарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашырға мөмкин. 10 февралдә Раевка ауылында "Рәсәй саңғы юлы - 2024" Бөтә Рәсәй күмәк саңғы ярышының район этабы ойошторолдо. Ә 17 февралдә шул уҡ ауылдың балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе биләмәһендә Әлшәй районы профсоюздарының, хеҙмәт коллективтарының һәм ауыл биләмәләренең ҡышҡы спартакиадаһы үткәрелә. 9 февралдә Ишембай районында - скандинавса атлап йөрөү фестивале, 13 февралдә иһә биатлон буйынса Ишембай районы беренселеге булды. 17 февралдә Учалы районында "Аҡман-тоҡман" ҡышҡы һабантуй ойошторола, 18 февралдә спорт һөйөүселәрҙе "Ҡарбабайҙар фестивале"нә саҡыралар. 2024 йылдың ҡышҡы спорт төрҙәре көнө 3 мартҡа тиклем дауам итә. Тулыраҡ мәғлүмәтте үрҙә әйтелгән райондарҙың спорт комитеттарында алырға мөмкин. Әйткәндәй, йыл һайын тотош илдә Рәсәй Олимпия комитетының күмәк спортты үҫтереүгә булышлыҡ итеү программаһы сиктәрендә Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө үткәрелә. 2024 йылда Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө Сочиҙағы XXII Ҡышҡы олимпия уйындарының һәм XI Ҡышҡы паралимпия уйындарының ун йыллығына арнала.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Тиҙҙән Башҡортостанда бурыслыларҙың торлағын һатыу ойошторола. Республика ҡалаларында һәм райондарында йорттарҙы, фатирҙарҙы һәм бүлмәләрҙе арзан хаҡҡа һатып алырға мөмкин, тип хәбәр итәләр. Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Салауатта, Өфө, Туймазы, Ишембай, Ауырғазы, Баҡалы райондарында төрлө майҙанлы йорттар, фатирҙар, бүлмәләр һатыуға ҡуйылған. Сауҙалашыуҙа ҡатнашыу өсөн заявкалар ҡабул итеү ваҡыты 26 февралдә - 1 мартта тамамлана.

✓Өфө шорт-трексыһы Семён Елистратов Көслөләр спартакиадаһында көмөш миҙал яуланы. Семён Елистратов 1500 метр арала икенсе булып килде. Көслөләр спартакиадаһы - Рәсәйҙә Олимпия уйындарына тиңдәш. Ярыштар ун йыл элек Сочиҙа уҙған XXII ҡышҡы Олимпия уйындары көндәрендә уҙғарыла. Спартакиада миҙалдары 9-18 февралдә уйнатыла.

✓Uzbekistan Airways авиакомпанияһы Башҡортостандың баш ҡалаһынан Үзбәкстан ҡалаларына осоштар географияһын киңәйтә. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылдың 5 мартынан авиакомпанияның Фирғәнә - Өфө - Фирғәнә йүнәлеше буйынса даими авиарейстары асыла. Осоштар аҙна һайын шишәмбе көндө Airbus A320 самолеттарында башҡарыла. "Өфө" аэропортынан - урындағы ваҡыт буйынса таңғы сәғәт 4 тула 25 минутта. Uzbekistan Airways Өфөнән Ташкентҡа һәм Наманганға ла даими осоштар яһай.

✓Өфө спортсыһы Матвей Тычинкин еңел атлетика буйынса Рәсәй беренселегендә бронза призер булды. Матвей Тычинкин 227 сантиметр бейеклеккә һикереп, Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры нормативын үтәне. Спортсы әйтеүенсә, ул еңеүгә бик оҙаҡ барған, әммә был уның өсөн көтөлмәгән хәл булған. Еңел атлеттар ярышы Санкт-Петербургта 2024 йылдың 9 февраленән 11-нә тиклем уҙҙы. Турнирҙа 23 йәшкә тиклемге егет-ҡыҙҙар ҡатнашты.

✓"Фатирҙар донъяһы" ресурсы мәғлүмәттәре буйынса, ғинуарҙа Өфөлә фатирҙы ҡуртымға алыу хаҡы декабрь менән сағыштырғанда 1-2 процентҡа (300-600 һум) арзанайған. Хәҙер бер бүлмәле фатир хаҡы уртаса 19,43 мең һум тәшкил итә (декабрҙә 19,7 мең ине); ике бүлмәле - 25,34 мең һум (декабрҙә - 25,6 мең); өс бүлмәлеһе - 33,27 мең һум (33,9 мең һум). Башҡа ҙур ҡалаларҙа ла ошондай күренеш күҙәтелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Үҙәкте асыу тантанаһында видеобәйләнеш буйынса Рәсәй Президенты Владимир Путин да ҡатнашты. Ауыр сирле балаларҙы дауалау үҙәге заманса медицина ҡорамалдары менән йыһазландырылған.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



## БАЛАЛАРҒА, ОЛОЛАРҒА...

**Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Ленара Иванова Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Дөрөҫөн әйткәндә" программаһында Өфө ҡалаһының элекке "Салют" санаторийы базаһында һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәр өсөн реабилитация һәм белем биреү үҙәге төҙөлөүе хаҡында мәғлүмәт бирҙе.**

Бында уҡыу кабинеттары, спорт һәм гимнастика залдары, ағас эшкәртеү, кулинария, сәскәселек, көршәк эшләү оҫтаханалары буласаҡ. Был мөһим объектты ағымдағы йылдың сентябрендә сафҡа индереү күҙаллана. Министрҙың белдереүенсә, ошо махсуслаштырылған үҙәктә мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың барса категориялары өсөн улар шөғөлләнә алырлыҡ заманса комфортлы мөхит булдырыласаҡ. Бындағы махсус йыһазлы объекттар ян-яҡтан ҡурсалаусы кәртәләр менән уратып алына, төрлө кимәлдәге яндауырҙар, пандустар, лифттар, ҡулайлаштырылған санузелдар, киңәйтелгән инеү урындары, бер кимәлдәге, тупһаһыҙ иҙәндәр балалар өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Шулай уҡ бассейн, ҡышҡы баҡсалар, уйын майҙансыҡтары ла буласаҡ.

Йәнә 2024 йылда Өфөлә йәшәүсе оло быуын кешеләре өсөн Зорге урамында "Имеnлек" тип аталған геронтология үҙәге асыласаҡ. Унан башҡа БР Башлығы Радий Хәбиров тарафынан хупланған хеҙмәт интеграцияһы иҗтимағи мультиүҙәген асыу планлаштырыла. Унда ҡала мөхитендә киң ҡулланылған төрлө һөнәрҙәргә өйрәтеү өсөн 10 оҫтахана эшләй башлаясаҡ.

## ГОСПИТАЛЬ МӘКТӘБЕ АСЫЛДЫ

**Өфөлә яңы ғына сафҡа индерелгән Балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәге базаһында "УҡыйбыҙБеләбеҙ" төбәк майҙансығының икенсе госпиталь мәктәбе эшләй башланы.**

Уны Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты тулыһынса финансланы. Ошо медицина объектын асҡан саҡта майҙансыҡ менән БР Башлығы Радий Хәбиров та танышты. Стационарҙа оҙайлы ваҡыт дауаланыуға мохтаж булған балалар ошо мәктәптә белем алыуҙарын дауам итеп, мәктәп программаларынан артта ҡалмаясаҡ. Майҙансыҡ сиктәрендә һаулығы насарайып, ҡәҙимге мәктәпкә йөрөй алмаған балалар менән Ситтән тороп белем биреү буйынса республика үҙәге уҡытыусылары шөғөлләнәсәк. Госпиталь мәктәбендә төрлө оҫтәлмә шөғөл-ғәмәлдәр ойоштороу ҙа күҙаллана. Уларҙа ҡатнашыу сирле балаларға ыңғай тәьсир итә. Мәҫәлән, яңы мәктәптә "Оло донъя картиналары" тигән проект ғәмәлгә ашырыла башланы. Бәләкәй пациенттар рәссам Мария Копысова етәкселегендә дауахананың бер холын Василий Кандинский картиналары мотивтары буйынса тәҙәлгән композиция һүрәттәре менән биҙәй башланы. Дөйөм майҙаны 18 мең кв. метр булған үҙәкте асыу тантанаһында видеобәйләнеш буйынса Рәсәй Президенты Владимир Путин да ҡатнашты. Ауыр сирле балаларҙы дауалау үҙәге заманса медицина ҡорамалдары менән йыһазландырылған. Бында беҙҙең төбәк өсөн уникаль булған операциялар, шул иҫәптән елек күсереп ултыртыу өсөн тейешле шарттар булдырылды.

## ИНОРСТА...

**Баш ҡалабыҙҙың Инорс микрорайонында, элегерәк швед диализ үҙәге урынлашҡан Ферин урамындағы бер бинала яңы балалар сәнғәт мәктәбе асыласаҡ.**

"Ошо бинаны арендаға алған сит ил граждандары уны кире бирергә мәжбүр булды. Хәҙер яҡшы итеп ремонтланған, һәйбәт инженер инфраструктуралы 2 мең квадрат метр майҙан Инорс балаларына тапшырыласаҡ. Ул беҙҙән әллә ни сығымдар талап итмәй. Сәнғәт мәктәбе музыка, рәсем төшөрөү, театр сәнғәте һәм спорт йүнәлештәрендә эшләйәсәк. Мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә булышлыҡ итеү йәһәтенән беҙ бында аҙ мобилле балаларҙың үҫеше өсөн айырым шарттар булдырасаҡбыҙ. Шулай уҡ яҡшы сифатлы ғаилә үҙәген асыу идеяһы ла бар", - тине Өфө мэры Ратмир Мәүлиев.

## ЯҢЫ ЙЫЛДА... ЯҢЫ ЮЛ

**Көнсығыш сығыу юлы - Башҡортостанда һәм Волга буйы федераль округындағы иң эре инфраструктура проекты, ул концессия килешеүенә ярашлы төҙөлә. Дөйөм сығымдар күләме - 40,3 млрд һум. 4,5 млрд һум - республика бюджетынан, 26,7 млрд һум - федераль ҡаҙнанан, 9,1 млрд һумы - концессионер иҫәбенән финансланды.**

Әлеге ваҡытта унының төньяҡ тоннелендә бетон менән түшәлгән юл участкаһында махсус юл билдәләрен төшөрөү (разметка) буйынса эштәр тамамланды, көньяҡ тоннелдә лә ошондай эштәр аҙағына етеп килә. Күпер өҫтөн, эстакаданы һәм тоннелдең ике яғындағы юлдарҙы асфальтлау көҙгә тиклем уҡ тамамланғайны. Тоннелдең оҙонлоғо - 1,3 км, максималь тәрәнлеге 63 м. Бында хәҙер төҙөләш-монтаж эштәре лә тамамланыуға табан бара. Портал янындағы стеналарҙың фасады плитәләр менән ҡаплана, ҡарауыл бинаһы төҙөлә. Күперҙә һәм эстакадала һыу үткәргес коллекторҙар, яндауырҙар һәм тауыштан һаҡлау экрандары монтажлана, юл билдәләре, барьер ҡоймалары ҡуйыла. Яҙ етеүгә, ошо өр-яңы сығыу юлы Өфө водителдәренә матур бүләк буласаҡ.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

### АБДУЛОВ МАРСЕЛЬ ХӘБИБ УЛЫ

Инженер-урмансы, вуз уҡытыусыһы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Марсель Хәбиб улы Абдулов 1931 йылдың 8 майында Башҡорт АССР-ының Өфө кантоны Ҡуранса ауылында тыуған (хәҙерге Нуриман районында, был ауыл бөткән). Уның атаһы Хәбиб Нуриман район советы башҡарма комитеты рәйесе, һуңынан Нуриман урман хужалығы директоры вазифаларын башҡара, 1947 йылда фажиғәле рәүештә һәләк була. Марсель Хәбиб улы урта мәктәпте тамамлағас, Ленинград урман-техник академияһына уҡырға инә, әммә икенсе курсты тамамлағас, әсәһенә даими ярҙам итеп тороу маҡсатында Башҡортостан ауыл хужалығы институтына күсә. Институтты 1953 йылда тамамлай һәм инженер-урмансы һөнәренә эйә була. 1953-1954 йылдарҙа - Нуриман урман хужалығында өлкән урмансы;1954-1961 йй. - Ҡыҙыл Шишмә урман хужалығы директоры, Башҡорт АССР-ы урман хужалығы һәм урмандарҙы яҡлау инспекцияһы башлығы; 1966-1991 йй. - Башҡорт АССР-ының урман хужалығы министры; 1991-1996 йй. - Халыҡ-ара урман институтының Башҡортостан төбәк үҙәге директоры.

Марсель Абдулов Башҡортостан Республикаһы урман хужалығы үҫешенә ҙур өлөш индерә: урмандарҙы тергеҙеү һәм ағас ултыртыу эштәре башҡарыла; эродирланған (эрозия арҡаһында ыңдырышлы ҡатламы юғалған) ерҙәр урман ултыртып тергеҙелә, мелиорация маҡсатында агроурман майҙандары барлыҡҡа килә (93 мең га); урман орлоҡ базаһы булдырыла; ауыл хужалығы ерҙәрендә һаҡлағыс урмандар үҫтерелә; тәбиғәт зоналарында урман хужалығын комплекслы алып барыу ысулы уйлап табыла һәм ғәмәлгә индерелә; йылға-күлдәрҙең текә ярҙарын емерелеүҙән һаҡлау өсөн һәм йырындарҙың киңәйеүен туҡтатыу сараһы итеп ағас ултыртыу технологияһы эшләнә; сәнәғәти нигеҙҙә махсус плантацияларҙа дарыу үләндәре үҫтерелә.

Уның инициативаһы менән Рәсәйҙә беренсе лимонарий һәм урман аҙыҡтарын эшкәртеү цехы төҙөлә, 1973 йылда Өфө урман музейы асыла. 56 ғилми хеҙмәт, шул иҫәптән 2 монографик эш авторы.

БАССР-ҙың 9-сы, 10-сы, 11-се һәм БР-ҙың 12-се саҡырылыш Юғары Советы депутаты. РСФСР-ҙың атҡаҙанған урмансыһы (1978), Рәсәй Федерацияһының Дәүләт премияһы лауреаты (1991).

Наградалары: ике "Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ" (1966, 1976), "Халыҡтар Дуҫлығы" (1981), "Почёт Билдәһе" (1971) ордендары кавалеры.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Банан

Бешкән банандың йомшағында сахароза һм фруктоза, крахмал, органик кислоталар, пектин, дуплау һәм хуш еҫле матдәләр бар. Минераль матдәләрҙән иң күбе калий. Шулай уҡ бананда аскорбин кислотаһы, пиридоксин, каротин, никотин кислотаһы бар. Яһалма шарттарҙа унда шәкәрҙәр һәм һыуҙа иҙелмәле пектин арта. Дауалауҙа банандың емешен ҡулланалар: ул томалап ала, туҡлыҡлы, тынысландырыусы көскә эйә.

❖ Күнел төшөнкөлөгө һиҙһәгеҙ, көн һайын 1 банан ашарға.

❖Йүтәлдән бананды иләк аша үткәреп, эҫе һыулы кәстрүлгә һалырға. 2 бананға 1 стакан шәкәрле һыу нисбәтендә эшләргә. Шунан тағы берҙе йылытып эсергә.

❖ Эс киткәндә 4-5 банан ашарға.

❖ Ашҡаҙандың сей яра ауырыуынан көн һайын ризыҡланыуҙан алда 1-әр банан ашарға. Банандар сей яраны уңалтырға ярҙам итә, унда ҡарынды ашҡаҙан һутынан һаҡлай торған матдәләр бар.

❖ Һырҙар, кипкән һәм сырышҡан тиренең торошон яҡшыртыу өсөн бананды сәнске менән бутҡа итеп иҙергә һәм биткә 20 минутҡа һыларға. Битлекте башта йылы, шунан һалҡын һыу менән сайып төшөрөргә. Уны көн һайын, йәки көн аша яһарға була. Дауаланыу курсы - 15-20 битлек.

❖ 1 ҡалаҡ эремсеккә 1-әр ҡалаҡ ҡаймаҡ, банан йомшағын ҡушып иҙергә һәм биткә һылап, 15-20 минут торорға. Был бит тиреһе ҡәҙимге һәм кипкән булғанда ярҙам итә.

❖ 1 бананды иҙеп, 1 ваҡлап туралған алма, 1 балғалаҡ зәйтүн майы ҡушырға. Шунан 1 йомортҡа ағы һәм аҙ ғына крахмал ҡушырға. Битлекте биткә һәм муйынға һөртөргә.

❖ 1 балғалаҡ иҙелгән банан, 2 балғалаҡ майлы эремсек, йомортҡа һарыһының яртыһын һәм 1 балғалаҡ камфора майын ҡушып болғарға, биткә һылап, 20 минут торорға. Битлекте йыуып төшөргәндән һуң, ромашка төнәтмәһе йәки сәй менән йыуыныырға ла, туҡлыҡлы крем һөртөргә. Битлек тирене йомшарта.

❖ 1 бананды иҙеп, 1 ҡыярҙы ваҡ ҡырғыстан үткәреп, 2 ҡалаҡ зәйтүн майы өҫтәп, болғатырға. Битлекте һөртөп, 30 минут торорға һәм һалҡын һыу менән сайып төшөрөргә.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡарабаш өйрәк**

**(Морская чернеть)**



Ала сумғыс өйрәккә оҡшаған, тик ата ҡоштоң арҡаһы буй-буй һыҙатлы аҡ-һыл-көл төҫөндә, инә ҡоштоң суҡышы аҡ ҡайма менән уратып алынған. Суҡыштары киң, күкһел. Күҙҙәре һәм тәпәйҙәре - һары. Осоп барғанда ҡанаттары ҡоба-аҡһыл булып күренә. Һыуҙан еңел генә осоп китә.

Тундра, себер һаҙлыҡтарын үҙ итә. Кама, һирәгерәк Ағиҙел, Дим, Һаҡмар йылғалары буйында осоп китеп-ҡайтып барышлай ғына күренеп ҡала. Был апрелдең икенсе яртыһында була. Көҙөн иһә сентябрҙең аҙағынан башлап, боҙ ятҡанға тиклем йылы яҡҡа оса.

**Мәрйенгүҙ**

**(Белоглазый нырок)**



Кәүҙәгә һуна ҡоштан бәләкәй. Ата мәрйенгүҙҙең башы, түше, ҡабырғалары ерән-һоро, ҡорһағы, эйәк аҫты - аҡ. Суҡышы ҡара, тәпәйе һоро, күҙҙәре аҡһыл һары, ситтән ҡарағанда аҡ булып күренә. Осоп барғанда ҡанаты аҡ булып күренә. Инә ҡош ата ҡошҡа оҡшаған, тик төҫө тоноғораҡ, күҙҙәре ҡара. Еңелерәк оса. Ата мәрйенгүҙҙең тауышы баҙыҡ, инә ҡоштоң иһә ҡыҫҡен, ҡырҡыу.

Төбәктә юғалып барған ҡоштар төркөмөнә ингән.

Рәсәйҙең көньяғының урманлы-далалы, далалы төбәктәрендә, көнсығыштан Алтайғаса осрай. XIX-XX быуаттар сигендә Урал алдында ла оя ҡороп йәшәй. Көҙөн Кама менән Ағиҙел үҙәндәрендә туктап китә. Беҙҙең төбәктән көньяҡтараҡ оя ҡорғас, ҡайҙан осоп китеп барышлай күренеп ҡала һуң тигән һорау ҙа тыуыр. Өргән (Учалы), Мәләүез районы территорияһында Ағиҙел йылғаһында осрауы ла билдәле. Шулай уҡ Ырымбур өлкәһендә лә мәрйенгүҙҙең оя ҡороп йәшәүе мөмкин. Ә был республиканың башҡа ерҙәрендә осрай ҡалһа, улар, ысынлап та, ҡышлау урындарына китеп барышлай ғына туктап китә тип фекер йөрөтөргә мөмкин. Башлыса Көнсығыш Кавказда, Каспийҙың көньяҡ-көнсығыш ярҙарында, Амударьяның үрге өләшөндә ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ФИНАНС МӘКТӘБЕ

# АҠСАҢДЫҢ ФАЙҘАҺЫН КҮР!



**Халыҡтың юҡ тигәндә лә тинләп-һумлап бер аҙ туплай барған йыйынтығы була. Кемдер уны балаһының киләсәге, уҡыуы өсөн һала бара, кемдер кредитҡа бәйләнмәйенсә генә машина алырға теләй, ә кемдер, айырыуса өлкән йәштәгеләр, һуңғы юл сығымдарын яҡындары өҫтөнә ауҙармаҫҡа теләп, пенсияһынан өҙөп-йолҡоп йыя тора. Һәм улар бөтәһе лә әҙме-күпме аҡсаларын инфляциянан һаҡлау өсөн отошлораҡ һаҡлыҡ варианттары эҙләй.**

Әйткәндәй, 2024 йылда был йәһәттән бер ни тиклем килем алырға мөмкинлек бар, ти финанс буйынса экспрттар. Ошо хаҡта "Московский комсомолец" гәзите (№6, 2024) хәбәрсеһе һорауҙарына финанс белгестәре **А.Разуваев, А.Кокорева, А.Калманович** яуаптар бирә.

**➔ Иң тәүҙә һаҡлыҡтағы аҡсаны инвестициялау юлдарынан башлайыҡ. Иң ябайы - банктар тәҡдименән файҙаланып, аҡсаны депозитҡа һалыу. Тик быны унаң төрҙәре бик күп, шулай ҙа күберәк килем алыу өсөн уның ниндәйен һайлау отошлораҡ?**

**Разуваев:** Әлеге ваҡытта банктағы һаҡлыҡ иң ябай һәм шул уҡ ваҡытта аҡсаны инвестициялауҙың ярайһы ғына килемле төрө. Дөрөҫ, быңдай хәл мәңгелек күренеш түгел, әлбиттә: инфляция кимәле түбәнәйә, шул уҡ ваҡытта банктағы һаҡлыҡты юғары процент менән тәьмин итеүсе ставка ла түбәнәйә. Тик шулай ҙа, минең уйымса, яҡындағы ярты йылда әллә ни үҙгәрештәр булмаясаҡ. Бынан сығып, иң яҡшыһы аҡсаны оҙайлы ваҡытҡа билдәле бер ставкала һаҡларға кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Рәсәйҙә 40 триллиондан ашыу һум аҡса һаҡлыҡта ята. Үҙәк Банктың бурысы - ошо аҡсаларҙың инфляциянан осһоҙланыуына юл ҡуймау.

**➔ Ә ниндәй һаҡлыҡ төрөн һайларға һуң - һумдарҙымы, әллә валютанымы?**

**Калманович:** Әлеге ваҡытта һумдарҙағы һаҡлыҡ өҫтөнлөк менән файҙаланыла. Был валюталы һаҡлыҡтың геосәйәси хәүефлеге менән аңлатыла. Ә инде һумдарҙағы менән валюталағы һаҡлыҡтарҙы сағыштырып ҡарағанда, проценттарҙың хәҙер бөтөн ерҙә лә юғары булыуы күренә. Әгәр ҙә тормошоғоҙҙағы ниәттәргә ярашлы һеҙгә валюта файҙаланыу кәрәк икән, ундай һаҡлыҡ асыуҙа мәғәнә бар. Ә инде килем йәһәтенән ҡыҙыҡһыныу булғанда, һаҡлыҡ аҡсаларҙы һумдарҙа тотоу хәйерлерәк, сөнки был билдәле бер өҫтөнлектәргә эйә: һаҡлыҡтарҙы страховкалау һәм аҡсаларҙы килем биреүсе процентарға ҡарап бер нисә банкҡа һалырға була. Тик мин шулай ҙа һумдарҙағы һаҡлыҡ яҡлымын. Әгәр ҙә долларҙарҙа һаҡлыҡ тотоуҙың бөтөн нескәлектәрен белеп бөтөрә алмаған хәлдә, уны һумдарҙа һалығыҙ.

**Разуваев:** Мин, мәҫәлән, валюта менән булышмаҫ инем, сөнки Мәскәү биржаһына ҡаршы санкция була ҡалһа, евро һәм доллар менән ниҙәр буласағы билдәһеҙ. Бик тә валюта кәрәк икән, юань, дирхам, һис булмаһа, әзербайжан манатын һайларға мөмкин.

**➔ Инвестициялауҙың мөмкин булған тағы бер варианты - акциялар һәм облигациялар. Һаҡлыҡ йәһәтенән граждандарға уларҙы тәҡдим итергә буламы һәм был осраҡта ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙың килеме ниндәй буласаҡ?**

**Кокорева:** Тәүҙә Рәсәй ҡағыҙҙары - акция һәм облигацияға инвестициялауҙы ҡарайыҡ. Бөгөн граждандар өсөн ике вариант бар. Берәй компанияла брокер иҫәбе асырға була. Брокер компанияһы аша индивидуаль инвестиция иҫәбе (ИИС) асырға ла мөмкин. ИИС тураһында һүҙ бара икән, бында һалым айырмаһы алыу мөмкинлеге булыуын иҫтә тотоу кәрәк. Был юл, әлбиттә, туранан-тура ниндәйҙер компанияла брокер иҫәбе асыуға ҡарағанда отошлораҡ. Күптән түгел Президент В.Путин ИИС-ты банк һаҡлығы кеүек үк суммаға страховкалау механизмын эшләргә ҡушты. Ҡиммәтле ҡағыҙҙар менән эш итергә теләгән тәжрибәһеҙ инвестор өсөн ИИС хәүефһеҙерәк тә, ҡыҙыҡлыраҡ та буласаҡ, тип уйлайым. Әйткәндәй, Рәсәйҙең ҡиммәтле ҡағыҙҙар баҙары бөгөн үҙенә йәлеп итерлек кимәлдә. Тәү сиратта дивиденд ҡағыҙҙарына иғтибар итеү кәрәктер. Дивидендтарҙың йәшәйәсәге былтыр уҡ билдәле булды һәм был хаҡта иң эре дәүләт банкы, унан ҡала башҡа компаниялар ҙа иғлан итте. Быйыл беҙ, мәҫәлән, үҙ иҫәбен ярайһы ҙур ғына финанс запасы менән тулыландырған металлургтарҙан яҡшы ғына дивидендтар көтәбеҙ. Рәсәй дәүләт банктары ла ярайһы тотороҡло хәлдә һәм улар тарафынан лицензияны ҡайтарыу кеүек көтөлмәгән хәүефхәтәр булмаҫ, тигән ышаныс бар. Нефть секторы компанияларының мөмкинлектәре бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм, шулай ҙа улар металлургтарҙан бер аҙ ҡалыша. Ә кешеләр хәҙер аҡсаларын күпләп тотона башланы. Операция отчеттарынан күренеүенсә, уртаса чек та, һатып алыусылар ҙа арта бара. Тимәк, алдынғы компанияларҙың акциялары үҙенә күрә һаҡлағыс актив сифатына эйә буласаҡ.

**➔ Инвестицияларҙың тағы бер ысулы - ҡиммәтле металдар, шулар араһында иң таралғаны, әлбиттә - алтын. Ул тәңкәләр рәүешендә лә, ҡалыпҡа ҡойолмалары ла (слитки), металл иҫәбендә лә була. Һеҙҙеңсә, быйыл алтын ярҙамында килем алырға мөмкин буласаҡмы?**

**Разуваев:** Алтын баҙарын 10 процент кимәлендә үҫеш көтә. Ә инде, әгәр ҙә берәй берәй хәрби конфликт йә булмаһа яңы пандемия, ә бәлки, еврозонанын тарҡалыуы йәки Европала банк көрсөгө башланып китә ҡалһа, ҡиммәтле металға шундуҡ ихтыяж юғары күтәреләсәк. Ғөмүмән, теләһә ниндәй ҡыҫкен һынылыш, ҡыйралыш мәлендә алтындың хаҡы ла ҡырҡа күтәрелә. Оҙайлы инвестиция өсөн алтын һәйбәт варианттарҙың береһе ул.

**➔ Ошо ваҡытҡа тиклем рәсәйҙәрҙең кубенә күсемһеҙ милекте аҡсаларын һаҡлауҙа ышаныслы ысул булараҡ күрә. Торлаҡ инвестицияһы быйыл да элеккесә үк көнүҙәк булып ҡалырмы?**

**Калманович:** Күсемһеҙ милек, йәғни "бетонға" аҡса һалыу һәр ваҡытта ла көнүҙәк, тик мәсьәлә шунда: ул ни дәрәжәлә отошло һуң? Әлеге көндөң юғары банк ставкалары күсемһеҙ милек баҙарына ныҡ ҡына "аяҡ сала". Был бигерәк тә ипотекаға ауырлыҡ килтерә, сөнки ҡиммәтле кредиттар уның юлын быуа. Ләкин шуныһы ла бар: быңдай ставкалар ағымдағы кимәлдә оҙаҡ дауам итмәйәсәк. Үҙәк Банкта белдереүҙәренсә, быңдай хәл ярты йә бер йылға һуҙылыр, артабан ставкалар түбәнәйә башлаясаҡ. Шул саҡта кредиттар ҙа осһоҙлана төшөр һәм был күсемһеҙ милек баҙарының үҫешенә юл асыр.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

АЛДАЙҘАР!

# АЛДАНМАҒЫҘ!



**Интернет селтәрендә, ваҡытлы матбуғат биттәрендә, телевидение һәм радио эфирҙары аша әленән-әле яңырып торған мутлашыу юлдары тураһында йыш мәғлүмәт бирелә. Ләкин мутлашыусылар ҡулына эләгеп, аҡсаларын юғалтыусылар һаны кәмемәй. Быңдай тоҙаҡҡа эләгеүселәрҙән бер тәүлек эсендә генә лә тиҫтәнән ашыу ғариза ҡабул ителә, мутлашыусылар миллионлап аҡса үҙләштерә. Нисек был бәләгә тарымаҫҡа?**

Әгәр ҙә телефон сымының икенсе осонда тәфтишсе, полиция йәки ФСБ хеҙмәткәре икәнен иштекәс үк һөйләшеүҙе туктатып, телефонды һүндерергә кәрәк. Полиция, Үҙәк банк хеҙмәткәрҙәре алдында кемгәлер шылтыратып, уның картаһындағы аҡсаның һаҡланыуын ҡарауыллау бурысы тормай. Уларҙың хеҙмәти вазифалары бөтөнләй икенсе юҫыҡта.

Инвестицияларға аҡса һалырға өгөтләп шылтыратыусылар менән дә бәйләнешкә тиҙ үк өҙергә кәрәк. Был өлкәлә тәрән белемле, эш тәжрибәһе күп булған кешеләр ҙә хатта инвестиция темаһына бик һаҡ ҡағыла, ә әлеге теманы бөтөнләй белмәгәндәргә ул өлкәне урап үк үтергә кәрәк. Шулай уҡ сим-картаның ҡулланыу ваҡыты бөтә, тигән һылтау менән дә мутлашыусылар ҡулдарына күпләп аҡса эләктерә. Сим-карта менән тиҫтәләгән йылдар дауамында ҡулланыусылар бар, ләкин уларҙың телефоны эшләүҙән туктамай. Әгәр ҙә сим-картағыҙҙың хеҙмәтләндереүҙән туктап ҡуйылыуынан ҡурҡаһығыҙ икән, операторҙарҙың офисына барып, бөтә мәғлүмәтте белергә була.

Һәм иң киң таралған мутлашыу юлы - "яҡындарығыҙ аварияға юлыҡты", тип шылтыратыуҙары. Быңдай хәбәрҙе иштекәс, ысынлап та, баҙап-юғалып ҡалырға мөмкин. Ләкин дөрөҫлөктө үҙегеҙгә асыҡлау, йәғни туғандарығыҙға нәҡ үҙегеҙ шылтыратып, мәғлүмәтте дөрөҫләү мөһим.

Башҡа төрлө мутлашыуҙар тураһында. Республика халҡына ялған түләү квитанциялары тараталар. Унда тиҙ арала һыу һанағыстарын тикшереү мөһимлеге һәм әгәр ҙә тикшереү үткәрмәгәндә, һыу өсөн түләү норматив буйынса башҡарыласаҡ, тигән мәғлүмәт яҙылған. Һәм әлбиттә, ул тикшереүҙәр түләүле. Ҡала абонент хеҙмәте белдереүенсә, һәр һанағыстың тикшереү ваҡыты төрлөсә, тимәк, барыһына ла бер үк ваҡытта быңдай квитанция килә алмай.

Мутлашыуҙарҙың бөтә төрҙәре лә кешегә психологик баҫым яһауға ҡайтып ҡала. Мутлашыусылар бик һаҡ булған кешеләрҙең уяулығын юҡ итер өсөн әңгәмәнең, һүҙҙәренең һәр нескәлеген уйлап эш итә. Бер ҡасан да, бер кемгә лә банк иҫәбенең номеры, банк картаһынын пароле, артындағы CVV коды кеүек шәхси мәғлүмәттәрҙе әйтмәҫкә кәрәклеген үҙегеҙ ҙә хәтерҙә тотоғоҙ, яҡындарығыҙҙы ла иҫкәртегеҙ. Айырыуса, оло йәштәге туғандарығыҙға ҡат-ҡат әйтегеҙ был турала, төрлө миҫалдар килтереп дәлилләгеҙ.

***✓ Төркиҙәрҙең көнбайыш походтарын ҡағанаттың беренсе ҡағаны Бумындың бер туған энеһе Истеми ҡаған етәкләй. Уның ғәскәрҙәре, уңышлы хәрәкәт итеп, 558 йылда бөтөн Көньяҡ Урал Төрки ҡағанаты составына индерелә.***



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### V-VIII быуаттарҙа Көнсығыш Урал аръяғы ҡәбиләләре

Бакал ҡәбиләләренең көньяҡ күршеләре - Иртыш йылғаһының ике яҡ яры буйында һәм Ишем йылғаһының түбәнге өлөшөндә йәшәгән подчеваш мәҙәниәте ҡәбиләләре. Был мәҙәниәт бакалдыҡынан яҡшыраҡ өйрәнелгән, шуға күрә уның тарихында VI -VII, VII - VIII һәм VIII - IX быуаттарға ҡараған этаптар билдәләнә. Подчеваш ҡәбиләләре ултыраҡ йә иһә ярым ултыраҡ тормош алып барған, был йылға морондарында күп һанлы ҡаласыҡтар булыуы һәм уларҙың дүрт мөйөшлө ярым ер өйҙәрҙән тороуы иҫбатлай. Өйҙәр бүрәнә менән буралып, ер иҙәндәрендәге уйымда яғылған усаҡтар менән йылытылған. Үлгәндәрҙе ҡәбергә һалып ерләү йолаһы менән бер рәттән, мәйетте яндырыу ҙа ҡулланылған. Мәйет тораҡтарҙан ситтә яндырылған һәм янып бөтмәгән һөйәктәр ваҡ соҡорҙарға һалып күмелгән. Подчеваш ҡәбиләләрендә үлгәндәрҙе ҡурған аҫтына ерләү йолаһы ла булған.

Подчевашсыларҙың ерләү йолаларын өйрәнеү уларҙың күп вариантлы булыуын күрһәтә, быны уларҙың көнкүрешендә күсмә төрки ҡәүемдәренең әүҙем ҡатнашыуы менән аңлатып була. Подчеваш ҡомартҡыларының инвентары күп төрлө. Унда һуғыш ҡоралдарының (уҡ башаҡтарының) тимерҙән һәм һөйәктән яһалған предметтары, тимер бысаҡтар, ураҡтар күп. Төрлө типтағы һырғаларҙа, бил ҡайыштары ҡаптырмаларында һәм уға беркетелгән биҙәүестәрҙә, шулай уҡ йышыраҡ кеше һыны һәм айыу фигураларынан торған, ҡойоп яһалған һынлы сәнғәт предметтарында ошо мәҙәниәт ярайһы уҡ тулы сағылдырылған. Керамикалары түңәрәк төплө, туҫтаҡҡа яҡын һауыт-һабанан тора. Ауыҙҙары тирәләй тешле штамп менән яһалған эҙҙәр менән аралаш горизонталь һыҙыҡтарҙан торған орнамент ошондай һауыттарҙың күбеһенең характерлы элементы булып тора. Һауыт-һабаның ошо тибы бер ни тиклем Көньяҡ Уралдың кушнаренко һауыттарының һуң варианттарын хәтерләтә.

Урманлы Урта Уралда археологик яҡтан урман зонаһына ғына хас булған мәҙәниәте һәм йәшәү рәүеше сағылған күп булмаған ҡәбиләләр төркөмө билдәләнә. Уларҙың Башҡортостандың иртә урта быуаттар тарихына ниндәй мөнәсәбәттә булыуы асыҡланмаған әле.

### Көнбайыш Төрки ҡағанаты

Көнбайыш Төрки ҡағанаты тарихының төп этаптарын уҡыусыларыбыҙға ҡыҫҡаса аңлатып китмәгән хәлдә, иртә урта быуаттарҙағы Көньяҡ Уралдың этносәйәси тарихының күп мәсьәләләре аңлайышһыҙ ҡалыр.

VI быуат урталарында Евразия далаларында мөһим ваҡиғалар башлана, уларҙың иң әһәмиәтлеһе - фәндә Төрки ҡағанаты исеме аҫтында билдәле булған, 545 йылда Үҙәк Азияла барлыҡҡа килгән төрки дәүләте. Ул теле, тюгю-төрки ҡәбиләләре союзының күп йылдар буйына аварҙар (жуань-жуандар) менән көрәш алып барып, уларҙы тамам ҡыйратыуы һөҙөмтәһендә ойоша. Факттар аварҙар һәм төркиҙәр (теле, тюлю) араһындағы конфликтҡа Үҙәк Азияның киң халыҡ массалары ылыҡтырылғанлығын күрһәтә, ә уның эҙемтәләре бик күп ҡәүемдәрҙең Евразия далалары буйлап сираттағы күсешенә килтерә. Мәҫәлән, күскенсе аварҙарҙың төркиҙәр тарафынан эҙәрлекләнгән күп һанлы төркөмдәренең ҡыҫҡа ғына ваҡыт дауамында Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан, Көньяҡ Урал һәм Волга буйы далалары аша үтеп сығыуы ышаныслы рәүештә раҫланды; Волганың уң яры буйында ат һәм инвентарь (өҙәңгеләр, ауыҙлыҡтар) күмелгән, VI-VII быуаттар арауығына хас булғанса, һирәк кенә осрай торған ҡурған аҫтындағы ҡәберлектәрҙең хасил булыуын археологтарҙың ошо аварҙар менән бәйләүе нигеҙле, тип иҫәпләнә.

557-558 йылдарҙа уҡ аварҙарҙың Үҙәк Азия яҡтарынан ҡасып килгән төркөмдәре Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйын яулап ала, Дунай йылғаһының урта ағымындағы ерҙәрҙә ныҡлап төпләнә һәм үҙ дәүләтен - составына урындағы ҡәбиләләр ҙә ингән Авар ҡағанатын булдыра. Был ваҡиға Византия сығанаҡтарында сағылыш таба, унда 557-558 йылдарға ҡараған ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Византияға аварҙар тип аталған ғәҙәти булмаған ҡәбилә килеп керҙе, һәм уларҙы күрергә бөтөн ҡала йүгерешеп килде, сөнки бер ҡасан да ошондай ҡәүемде күргәндәре булманы. Артҡы яҡтан сәстәре бик оҙон булып, услама бәйләнгән һәм үрелгән, уларҙың башҡа кейемдәре бүтән гундарҙыҡына (кейемдәренә) оҡшаш. Улар, үҙ иленән ҡасып китеп, Скифия һәм Мизия өлкәләренә килде һәм, ҡабул итеүҙе һорап, Юстинианға илселәрен ебәрҙе". Аварҙарҙың төп массаһының төрки телендә аралашыуы шик тыуҙырмай. Урта Дунайҙағы һәм Паннониялағы Авар ҡағанаты IX быуаттың аҙағына тиклем (896 й.) йәшәй һәм бында Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы районларынан венгр-мадъярҙарҙың күсеп килеүенән һуң таркала. Аварҙарҙы еңеү төркиҙәрҙе Үҙәк Азия далаларының тулы власлы хужаһына әйләндерә һәм күрше ҡәүемдәргә ҡарата уңышлы хәрби хәрәкәттәр башлау мөмкинлеген бирә, һәм улар иҫ китерлек уңыштарға өлгәшә. Мәҫәлән, көнсығыш, төньяҡ һәм көнбайыш тарафтарҙа һуғыш хәрәкәттәре алып барып, төрки ғәскәрҙәре Тымыҡ океан ярҙарынан Көнбайыш Себергә, Ҡаҙағстандан Урта Азияның бер өлөшөнә тиклемге ерҙәрҙе үҙҙәренең дәүләтенә ҡуша.

Төркиҙәрҙең көнбайыш походтарын ҡағанаттың беренсе ҡағаны Бумындың бер туған энеһе Истеми ҡаған етәкләй. Уның ғәскәрҙәре, уңышлы хәрәкәт итеп, 558 йылда Волга йылғаһына килеп етә һәм, шулай итеп, бөтөн Көньяҡ Урал Төрки ҡағанаты составына индерелә. Артабанғы йылдарҙа төркиҙәр Төньяҡ Кавказ, хатта Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы һәм Ҡырым өҫтөнән дә үҙ контролен булдыра.

Төрки ғәскәрҙәре Себер һәм Ҡаҙағстан далалары киңлектәрен яулап алғас, берҙәм Төрки ҡағанаты тарҡалыуға дусар була һәм ике өлөшкә - Көнсығыш һәм Көнбайыш ҡағанаттарына бүленә. Истеми ҡаған Чуй йылғаһындағы Чуяб ҡалаһын (хәҙерге Ҡырғыҙстан биләмәһе) үҙенең резиденцияһы итә, әммә ваҡытының күп өлөшөн походтарҙа йә иһә үҙенең йәйге шәхси резиденцияларында уҙғара. Төрки ҡағандары һәм уларҙың яrandары хаҡында замандаштары теркәп ҡалдырған мәғлүмәттәр бар. Көнбайыш Төрки ҡағаны Ябгу ставкаһында булған Будда монахы Сюань Цзянь ошолай яҙа: "Ҡаған йәшел ебәк халат кейгәйне. Уны парсанан тегелгән халат кейгән, сәстәре толомлап үрелгән 200-ҙән ашыу тархан оҙатып йөрөнө. Йәнлек тиреһе менән ҡуша тегелгән кейем һәм йомшаҡ баш кейемдәре кейгән башҡа яугирҙар айбалталар, йәйәләр һәм байраҡтар тотоп торҙо. Уларҙың аттары иҫ киткес матур ине. Дөйәләрҙә һәм аттарҙа һыбай барыусылар шул тиклем күп, уларҙың барыһын бер юлы күрерлек түгел".

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**




*V-VIII быуатттарҙағы Көньяҡ Урал археологик ҡомартҡылары материалдары: 1-5 - уҡ башаҡтары; 6 - бронза көҙгөләр өсөн ҡойоу формаһы; 7 - бронза көҙгө; 8 - ауыҙлыҡ; 9,10 - ураҡтар; 11 - өҙәңге; 12 - ҡул тирмәндәренең таш дискылары.*

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Висла йылғаһында оборонала

1-се Белорус фронты командующийының 1944 йылдың 8 августындағы бойороғо менән 7-се гвардия атлы корпусы Висла йылғаһы буйындағы оборона участкаларында 8-се гвардия армияһына һәм Поляк Ғәскәренең 1-се армияһына алмашҡа килә. Оборонала тороусыларҙың төп маҡсаты - дошманды Демблин, Пулавы ҡалалары йүнәлешендә тотҡарлап тороу. Оборонаның беренсе эшелонына 14-се һәм 15-се гвардия атлы дивизиялары һәм 16-сы гвардия атлы дивизияһының 62-се гвардия атлы полкы сығарыла. Подстолице ауылынан Кобыльница ауылына тиклем 62-се полк биләгән оборона арауығы 8 саҡрым була. Полк фронты алдында дошмандың 2 сапер батальоны һәм 726-сы Төркөстан батальоны (төрлө милләтле рус булмаған совет хәрби әсирҙәренән йыйналған) ҡаршы тора. Улар артиллерия һәм миномет батареялары менән көсәйтелгән була. 16-сы гвардия атлы дивизияһының башҡа ике полкы Демблин ҡалаһынан 13 саҡрымға төньяҡ-көнсығыштараҡ Стары, Базанув, Новы районларында икенсе эшелонда оборона тота. 28 ноябрҙә 16-сы гв. атлы дивизияһы, беренсе эшелонға сығып, 14-се гв. атлы дивизияһы позицияларын ала.

Висла йылғаһы буйында 7-се гв. атлы корпусы 5 айҙан ашыу (1945 йылдың 7 ғинуарына тиклем) оборона һуғыштарында ҡатнаша, ул 69-сы һәм 8-се гвардия армиялары арауығын ышаныслы рәүештә ҡаплап тора. Корпус частары, Висла аша сығып, дошман оборонаһы биләмәләренә даими рәүештә разведка эшләй. Корпус разведчиктары 5 ай эсендә 346 тапҡыр разведкаға бара, 4 мәртәбә немец ғәскәрҙәренең тәрән тылына үтеп инә, алыштар барышында 400 дошман һалдаты һәм офицеры әсиргә алына.

16-сы гв. атлы дивизияһының 62-се гв. атлы полкында ла разведкаға етди иғтибар бирелә. Полк разведчиктарының дошман тылына үтеп инеп, мөһим мәғлүмәттәр туплауы менән полк командиры, гвардия подполковнигы М. Г. Маркарян һәм штаб начальнигы, гвардия майоры Ә. Ә. Йосопов етәкселек итә. Оборона һуғыштарында 62-се полк яугирҙары дошмандың 67 һалдатын һәм офицерын әсиргә ала. Дивизия разведкаһы начальнигы, гвардия майоры Александр Ҡормаҡаев разведчиктарға аныҡ бурыстар ҡуя, штабты дошман тураһындағы бик мөһим мәғлүмәттәр менән тәьмин итеүгә өлгәшә.

Ноябрь айында фронт штабы16-сы гв. атлы дивизияһы командованиеһына, ентекле разведка эшләп, дошман оборонаһының барса тәрәнлегендә мәғлүмәттәр тупларға бойора. А. Л. Ҡормаҡаев поляк телен белгән разведчиктарҙан, уларҙың үҙ теләктәренә ярашлы, айырым төркөм булдыра. Төркөм етәксеһе итеп тыумышы менән Гомель өлкәһенән булған гвардия өлкән сержанты, тәжрибәле һәм ҡыйыу разведчик Михаил Щелочков тәғәйенләнә. Разведка төркөмө, фронт линияһын тауышһыҙ ғына үтеп сығып, дошман оборонаһы торошо буйынса 25 саҡрымға тиклем тәрәнлектә күп мәғлүмәттәр туплай. Улар дошман оборонаһының икенсе линияһында әҙерлек торошон, немец гарнизондарының дислокацияһын асыҡлай, немец артиллерияһының ут нөктәләрен билдәләй. Батыр разведчиктар үҙ позицияларына табан йүнәлә, әммә Висла ярҙарына килеп етеүгә, немецтарҙың көслө пулемет һәм автомат уты аҫтына эләгә. М. А. Щелочковтың аяғы яралана, әммә уны бәйләп тороу өсөн мөмкинлек булмай. Батыр разведчик, көҙгө һалҡын һыуға ташланып, йөҙөп китә. Уға беҙҙең атлылар кәмә менән ярҙамға ашығалар, тамам хәлдән тайған разведчикты алып сығып, медсанбатҡа оҙаталар. Ошо батырлығы өсөн М. А. Щелочков I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Көрәшергә, эҙләргә, табырға, еңелмәҫкә!" кеүек бик матур девиздарыбыҙ булды. Һағынып иҫкә алам ул йылдарҙы һәм бөгөнгө йәштәргә лә шундай бер юл күрһәтеүсе, маяҡ булырҙай ойошма кәрәк ине, тим.*



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Уңдым" тигән шиғырында әйтелгәнсә, ғүмер юлының бер миҙгеленә барып еткәс, барыһынан да уңғанһыңмы, әллә туңғанһыңмы икәнде самалар, аңлар мәл етә. Кем нисектер, ә бына Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһенең директоры, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Харис Зәбих улы ӘБДРӘХИМОВ, шағир кеүек үк, "Эйе, уңдым, күп нәмәнән уңдым" тип әйтә алыр шәхестәрҙең береһе. Уның ғүмер юлы тураһында әңгәмәләштек.**

# КОМСОМОЛДА ТӘЖРИБӘ

## мәҙәниәттә быуын



**Харис Зәбих улы, һүҙҙе һеҙҙең тамырҙарығыҙ, атай-әсәйегеҙҙән алған ғүмерлек һабаҡтарҙан башлайыҡ әле. Бала саҡтан эш менән нығынып үҫкән ауыл балаһына тыуған төбәген ташлап сығып китеүе ауыр булманымы?**

- Тамырҙарым Күгәрсен районы Тәүәкән ауылынан, мин шунда донъяға килгәнмен, уҡығанмын, кеше булғанмын. Ҡыпсаҡ ырыуынанбыҙ. Атайым Зәбихулла ошо ауыл егете, әсәйем Зөһрә күрше Дауыт-Ҡайып ауылы ҡыҙы. Нәҫелдәрҙе барлаһаң, ике яҡтан да олатай-өләсәйҙәр ошо ерҙә йәшәгән, тырышып эшләгән заттарҙан. Ҡартатайым да, олатайым да һуғышта булғандар, аҙаҡ колхоз баҫыуҙарында, фермаларында ең һыҙғанып эшләгәндәр. Атайымдар ғаиләлә бишәү үҫкән: иң өлкән ағалары Әхмәҙулла бабай милиция органдарында эшләгән, икенсеһе Сәйфулла бабай һуғышта эҙһеҙ юғалған, атайым - өсөнсө бала, унан һуң Рамаҙан һәм Ғәфүр ҡустылары тыуа. Атайым оҫта ҡуллы булды, колхоз баҫыуҙарында ла эшләне, көтөүен дә көттө. Әсәйем дә унан һис ҡалышманы. Шул арала биш балаһын, ике апайым һәм ике һылыуымды, мине матур итеп тәрбиәләп, аяҡҡа баҫтырҙылар.

Беҙ үҫкән 1960-1970 йылдар бик тыныс, матур осор булды һәм шуға ла ниндәйҙер ауырлыҡтар кисерҙек, тип әйтә алмайым. Атай-әсәй яғынан ҙур иғтибар тойоп йәшәнде, барыбыҙҙы ла белемле иттеләр. Тәү сиратта кешелекле, ярҙамсыл, изге күңелле, ябай булырға өйрәттеләр. Һәм быны тел менән әйтеп түгел, ә үҙ өлгөһендә күрһәтеп үҫтерҙеләр. Атайәсәйҙән, олатай-өләсәйҙәрҙән генә түгел, бөтә ауыл халҡынан алғанбыҙ тәрбиә һабаҡтарын. Бөгөн дә тыуған яҡҡа ҡайтҡанда эскерһеҙ, ябай ауылдаштар менән аралашыу, күрешеүҙән һуң үҙеңде яңы тыуғандай хис итәһең.

Мин бәләкәйҙән ҡул араһына инеп, ауыр эштән ҡурҡмай, атайыма "Ҡыҙыл Байраҡ" колхозының көтөүен көтөштөм. Ул осорҙа был ҙур хужалыҡты ағайыбыҙ Рамаҙан Әбдрәхимов етәкләне. Иң тәүге эш хаҡымды ла 6-сы класта уҡығанда баҫыусы булып эшләп алдым. Колхоз малдарын иртүк тороп яланға ҡыуа торғайным. Бына ошо эшем өсөн колхоз бригадиры, Мортаза Ғөбәйҙулла улының бер туған ҡустыһы Сәфәр ағай әсәй менән атайға 50 һум аҡса килтереп бирҙе. Уға нимәләр алып бирҙеләрме икән үҙемә, хәтерләмәйем... Шулай ҙа күңелемә яҡын ошо ауыл мөхитенән айырылып сығып китергә тура килде, сөнки 9-10-сы класты Күмертауҙа интернатта уҡыным. Унан инде 1979 йылда Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетына, башҡорт теле бүлегенә уҡырға индем.

**ВЛКСМ-дың Күгәрсен райкомында ойоштороу бүлеге етәксеһенең урынбаҫары, комсомолдың райком секретары булып эшләүегеҙ, бына ошо мәктәптә үтеү һеҙгә ниндәй йоғонто яһаны?**

- Педагогия институтын тамамлаған йылда мине ул саҡтағы мотлаҡ шарт буйынса йүнәлтмә менән Ғафури районының Ҡормантау ауылына эшкә ебәрҙеләр. Унда бер йыл географиянан уҡыттым да, министрлыҡҡа мөрәжәғәт итеп, тыуған яғыма ҡайтыуҙы юллай алдым. Ҡайтҡас, йәш белгес тип, комсомолдың район комитетына эшкә саҡырҙылар. Мәктәп йылдарында ла, аҙаҡ студент саҡта профком һәм студсовет ағзаһы булып, төрлө саралар ойоштороу буйынса тәжрибә булғас, ризалаштым. Бында ысын тәжрибә мәктәбе үттем, белемем дә артты, бик күптәр менән аралашырға, аҡыллы кешеләр менән бергә эшләргә тура килде.

Комсомол - үҙе үк тормош мәктәбе. Ул йәштәрҙе башҡаларға өлгө күрһәтеп, тырышып эшләп йәшәргә, тиҫтерҙәрең менән уртаҡ тел таба белергә, тәртипле, ысын кеше булырға өйрәтте. "Көрәшергә, эҙләргә, табырға, еңелмәҫкә!" кеүек бик матур девиздарыбыҙ булды. Ошонда эшләү, комсомол мәктәбен үтеү артабан тормошомда шул тиклем ярҙам итте, һағынып иҫкә алам ул йылдарҙы һәм бөгөнгө йәштәргә лә шундай бер юл күрһәтеүсе, маяҡ булырҙай ойошма кәрәк ине, тим. Бер ваҡыт совет осорона бәйле бар нәмәне лә хурлап телгә алһалар ҙа, бөгөн барыһы ла йәш быуынға дөрөҫ ҡиммәттәр биреп тәрбиәләүҙә "Октябрят", "Пионер", "Комсомол" ойошмаларының әһәмиәтен дөрөҫ баһалай. Ул саҡта Байкал-Амур магистрале, Йомағужа һыуһаҡлағысы кеүек ҙур төҙөлөштәрҙә ошо рухта тәрбиәләнгән йәштәр эшләне, гөрләтеп донъя көттө, маҡсатлы булды. Йәштәрҙең көсө ташып тороуын, уларға эш бирергә, күрһәтергә, әйҙәргә, ярҙам итергә кәрәк икәнен яҡшы аңлағандар. Бөгөн дә әле эшләп килгән йәштәр хәрәкәттәре араһында шундай тик яҡшылыҡҡа ғына өйрәткән береһе көс алһа, насар булмаҫ ине.

**Халыҡтан "Күгәрсен районының мәҙәниәт министры" тигән баһаны ишетеү мәртәбәләр. Был осор ауылдашығыҙ, Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың етәкселек иткән йылдарына ла тура килә...**

- Эйе, районда шулай шаяртып әйтә торғайнылар. Мин 14 йыл буйы районды мәҙәниәт бүлеген етәкләнем. Һағынып иҫкә ала торған бик матур йылдар булды, бергә эшләгән районды ауылдаштарыма сикһеҙ рәхмәтлемен. 1988 йылда район мәҙәниәт бүлегендә эш башланым, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Юғары Совет Председателе, аҙаҡ Президент булып һайланды һәм республикабыҙ, халыҡ өсөн әһәмиәтле эштәренең береһе - мәҙәниәтебеҙҙе, сәнғәтте үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлеүе булғандыр. Ул етәкселек иткән осорҙа профессиональ коллективтар менән бер рәттән, райондарҙағы үҙешмәкәр коллективтар ныҡ үҫеште, юҡлыҡ заманында ла саралар табып, матди-техник нигеҙҙе тәьмин итеп торҙо. Яҡташтары булараҡ, беҙҙән йыш ҡына оло байрамдарға, дәүләт кимәлендәге сараларға тирмә ҡороуҙы һорай торғайны. Шулай уҡ ҡалалағы Дуҫлыҡ монументы эргәһендә тирмә ҡороп, Б.Н. Ельцин, В.В. Путинды ла ҡаршы алдыҡ, яҡташыбыҙҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырыштыҡ.

Шундай арҙаҡлы ауылдашым булыуы менән ғорурланам. Ҡайҙа барһаң да, "Ҡайһы яҡтан?" тип һорайһалар, "Тәүәкәндән" тиһәң, уның исемен иҫкә алалар, "Президентыбыҙҙың ауылдашы икәнһең", тип яҡын күрәләр. Беҙ, ауылдаштар, уның илебеҙгә, ауылыбыҙға эшләгән изге эштәрен онотмайбыҙ.

**Һеҙҙе тыуған районығыҙ менән генә түгел, Стәрлетамаҡ ҡалаһы менән дә оҙаҡ хеҙмәт осоро бәйләй...**

- Күңелемә бик яҡын ҡала Стәрлетамаҡ, бәлки, йәшләгем ҡалаһы булғанғалыр. Киренән бында килермен тип уйламаған да инем, әммә оҙаҡ йылдар үткәндән һуң үҙем тамамлаған З. Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһына тәрбиә һәм социаль мәсьәләләр буйынса ректор урынбаһары итеп саҡырҙылар. Урынлашып киткәнсе, элек йәшәгән шул уҡ ятаҡта торҙом, 8 йылға яҡын эшләнем. Өфөгә лә эшкә күп саҡырҙылар, әммә Стәрлетамаҡты яҡыныраҡ күрәм, ул минең яратҡан ҡалам. Ул минә төрлө милләт кешеләрен берләштергән төҙөк, йәшел ҡала булыуы менән дә яҡындыр.

**Стәрлетамаҡ кеүек ҙур производствоһы булған, төрлө милләт вәкилдәре йәшәгән ҡалала башҡорт мөхитен һаҡлап ижад итеү нисек бирелә коллективығыҙға?**

- 1991 йылда барлыҡҡа килгән ике ҙур ойошманың Хөкүмәт ҡарары менән Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт бер-

**✓ Элеккесә, бер-беренә яҡын туғандарса, дуҫтарса ҡараш, кешелеклек донъя ығы-зығыһы, аҡса артынан ҡыуыу араһында юғалып ҡалған төҫлө. Был сәнғәткә лә тәьҫир итмәй ҡалмай, әлбиттә.**



# ТУПЛАҒАН,

## НЫҒЫТҠАН

Нигеҙ һалынғандан алып көслө етәкселәр, ижад кешеләре эшләгән һәм үҫтергән был коллективтарҙы. Шуға берләшеп эшләгән ойошма ла бер тиҫтә йыл эсендә бик күп ҡаҙаныштарға өлгәшә, республика һәм Рәсәйҙә генә түгел, халыҡ-ара кимәлдә лә үҙ исемен яңғырата ала. Шул еңеүҙәр араһында 2019 йылда уҙғарылған "Туғанлыҡ" халыҡ-ара театраль фестивалдә М. Кәрим әҫәре буйынса "Өс таған" спектакле менән Гран-при яулауҙарын телгә алып китергә мөмкин. Ғөмүмән, бик әүҙем һәм ижад ҡомары ташып торған кешеләр эшләй беҙҙә, коллектив менән дә, айырым үҙҙәре генә яулаған еңеүҙәре лә бихисап. Республика халҡына билдәле фильмдарҙа, сериалдарҙа ла төштөләр. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа туҡталып торған "Күңелле йәшәйбеҙ" тигән ял һәм күңел асыу тапшырыуын яҡын киләсәктә дауам итергә ниәт итеп торабыҙ, артистар ҙа, тамашасылар ҙа быны түҙемһеҙләнеп көтә.

Бына шулай, йылына 400 тапҡыр концерт ҡуйырға, 280 тапҡыр спектакль күрһәтергә, 102 мең кешене хеҙмәтләндерергә тигән дәүләт заданиеһын үтәп, ең һыҙғанып эшләйбеҙ. Хеҙмәткәрҙәребеҙ өсөн барлыҡ уңайлы шарттар булдырырға, матди-техник базаны яҡшыртырға, кәрәкле ҡоралдар, транспорт менән тәьмин итергә тырышабыҙ. Республиканың Мәҙәниәт министрлығы һәм ҡала хакимиәтенең ярҙамын, иғтибарын тойоп эшләйбеҙ һәм киләсәккә пландарыбыҙ күп.

ләшмәһе булараҡ ҡушылып эшләй башлауына былтыр 10 йыл тулды. Филармониябыҙ үҙе генә лә ҙур коллектив. Ул "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө, "Бейеү театры", Рус халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, "Сәрби" сыуаш ансамбле, Музыкаль-әҙәби лекторийҙы үҙ эсенә ала. И. Йомағолов исемендәге Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры - халыҡҡа киң билдәле коллективтарҙың береһе. Беҙҙең спектаклдәрҙе, концерттарҙы һәм башҡа төр сараларҙы ҡаланың төрлө милләтле халҡы ихлас ҡабул итә, даими тамашасыларыбыҙ бар. Балалар өсөн әкиәттәрҙе ғаиләләре менән килеп ҡарайҙар, спектаклдәрҙең башҡортса булыуы уларҙы һис аптыратмай: синхрон тәржемә менән тәьмин ителә бит. Мәктәптәр, предприятиелар, ойошмалар менән бик әүҙем эшләйбеҙ, ял көндәренә "ғаилә абонементы" үткәреү ҡаралған, Пушкин картаһы ныҡ ярҙам итә.

**Коллективығыҙ республиканың яҡындағы башҡа ҡала-ауылдарына ла йыш гастролдәр менән бара, баш ҡала тамашасыһын да хайран итеп ҡайта. Халыҡты ылыҡтырыуы, ҡыҙғатыуы еңелме?**

- Тормош алға бара, бөгөн йәнең нимә теләй, шул бар. Элек клубтарҙа гармун уйнап, халыҡты бейетеп йөрөһәк, хәҙер быны менән генә булмай. Кешенең үҙаңы, белеме, грамоталығы үҫте, улар артистарҙың нисек уйнауына, тамашаның йөкмәткеһенә баһа бирә, сағыштыра ала. Шуға бөгөнгө тамашасыны ылыҡтырыу өсөн тарихи ваҡиғаларҙы ла онотмай, үткәндәрҙе һәм хәҙергене берләштергән, ғаилә ҡиммәттәренә ҙур иғтибар бирелгән концерт-спектаклдәр ҡуйырға кәрәк. Халыҡтың йөрәгенә һәр ваҡыт ихлас йөрөй, һәм күпселекте тәшкил итә. Шулай ҙа телефон менән тороп, телефон менән йоҡоға талған кешеләр араһында тере аралашыу юҡ... Элеккесә, бер-беренә яҡын туғандарса, дуҫтарса ҡараш, кешелеклек донъя ығы-зығыһы, аҡса артынан ҡыуыу араһында юғалып ҡалған төҫлө. Был сәнғәткә лә тәьҫир итмәй ҡалмай, әлбиттә. Республикабыҙҙа ла дәүләт ҡарамағындағы мәҙәни ойошмаларҙан тыш, шәхси бригадалар, шәхси эшҡыуарҙар күбәйҙе һәм халыҡтың һайлау мөмкинлеге артты, тик сифат яғына иғтибар итергә кәрәк.

**Быйыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы үтә. Ғаилә ныҡлығының сере ниҙә?**

- "Ябайлыҡта - бөйөклөк", тигән һүҙҙәр күңелемә бигерәк яҡын. Ә инде халҡыбыҙҙың "Бер олоно, бер кесене тыңла", тигән боронғо аҡылына ғүмерем буйы таянып йәшәйем. Ябай һәм кешелекле булырға, тәкәбберләнмәскә кәрәк. Башҡалар кеүек үк, ябай бер ғаилә беҙ ҙә: ҡатыным Земфира менән 25 йыл бергә ғүмер итәбеҙ, ике ҡыҙ үҫтерҙек. Өлкәнебеҙ Ләйсән Башҡорт дәүләт университетын тамамланы, ә Айгөл Өфө фән һәм технологиялар университеты психология факультетының 2-се курс студенты. Ғаилә ныҡлығының серен тәү сиратта бер-берендә ихтирам итеүҙә, яратып, күңел биреп йәшәүҙә күрәм. Ярҙам итешеп, кәңәшләшеп, ике яҡ туғандар менән аралашып йәшәү мөһим. Минең эшем тынғыһыҙ булыуын, кеше ял иткәндә лә эшләүемде, ал-ял белмәүемде ҡатыным аңлап ҡабул итә, ундым. Бынан тыш, өйҙә эштәребеҙ тураһында һөйләшмәйбеҙ. Был насармы-юҡмы, әммә шулай ҡоролған. Бер кемде лә, эштәге хәлдәрҙе лә һөйләмәйбеҙ, барыһынан да ял итәбеҙ.

Ғаилә бәхете - өлкән быуындың һау-имен булыуында ла ул. Беҙ һаман да әсәй йылыһын тойоп йәшәгән бәхетле балалар, шөкөр. Мораҡта бер үҙе донъя көткән яраткан әсәйемә йыш ҡына ҡайтып йөрөйбөҙ, ул инде 89 йәш менән бара. Эш өсөн тыуған тиҙәр уның кеүек кешене, әле лә йүгереп йөрөй, егәрле, тынғыһыҙ, һис бер минут эшһеҙ тора алмай.

**Ҡыҙ баланы ҡырҡ ерҙән тый, тиерҙәр ине боронғолар. Бөгөн балаларҙы нисек тәрбиәләргә?**

- Боронғолар һис насарға өйрәтмәгән инде ул, был һүҙҙәрҙә лә хаҡлыҡ бар. Беҙҙә лә үҫкәндә ҡаты тоттолар, эш боҙоп йөрөү ҡайҙа ти ул. Атай-әсәйҙән генә ҡурҡып тороу түгел, уҡытыусыны ла хөрмәт иттек, ауылдағы һәр өлкән кешенең әйткәненә ҡолаҡ һала инек. Уҡытыусы менән ата-әсәләр бер һүҙле булды гел. Хәҙер бына ошо берҙәмлек етенкерәмәй. Ярай әле, мәктәпкә хеҙмәт тәрбиәһен кире ҡайтарҙылар, юғиһә, сәскә үҫтерергә лә, таҡта һөртергә лә ярамай, имеш. Шулай тәрбиә булмай бит инде, барыһын да тыйып бөтөрөп, эш рәте белмәгән быуын үҫтереүҙең йәмғиәткә файҙаһы бармы? Балаларҙы эш менән тәрбиәләргә кәрәк. Был уларҙы башҡаларға ҡарата кешелекле, ата-әсәһенә ихтирамлы булырға ла өйрәтә, халҡына һәм йәмғиәткә файҙалы кеше итеп үҫтерергә булышлыҡ итә. Юғиһә, барыһы ла тир түкмәйенсә генә ҙур етәксе, матур машина, етеш тормош тураһында хыяллана. Эшләмәйенсә бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай икәнен аңларға тейештәр. Был турала йәштәрҙең үҙенә тура әйтеп тә булмай әле хәҙер, күнелдәре тиҙ кителә, һүҙ күтәрмәүҙәре ихтимал. Өлкәндәрҙең кәңәшен ҡабул итеп бармайҙар шул. Шуға үҙебеҙгә матур өлгө күрһәтеп йәшәргә, һүҙ менән булмаҫҡа, ғәмәлдәребеҙ менән яҡшыны айырырға, тәрбиәләргә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Гел кешеләр менән эшләнем. Улар араһында даһиҙар ҙа, тормош юлын матур үтеүе менән үрнәк күрһәтеүселәре лә күп булды. Һәр береһенән өйрәнеп йәшәнем, әле лә шулай итәм", - тине Харис Зәбих улы әңгәмәбеҙҙе ослап. Бына шулай ғүмер буйы аҡыл туплап, башҡаларҙан фәһем алып, камиллыҡҡа ынтылып йәшәгәндәр тормошонда уңалыр ҙа. Һәр хәлдә, бөгөнгө геройым тап шундайҙарҙан.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ*

# МИНЕҢ МЕНӘН БУЛМАҪ, ТИМӘГЕҘ...

**Быйылғы ҡыштың ҡарлы булыуы арҡаһында һуңғы ике айҙа йыш ҡына уйнаған бурандар хатта республика кимәлендәге юлдарҙың ябылыуына ла килтерҙе. Иң үкенеслеһе, һауа торошо тураһында алдан мәғлүмәт булып, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының юл хәрәкәте сикләнеүе хаҡында иғланы ла туҡтатмай халыҡты. Үткән аҙналағы ялдарҙа бер нисә ғаиләнең төнгә ҡарай балалары менән машинала юлдарҙың асылыуын көтөп ултырырға мәжбүр булыуы тураһында һөйләүҙәрен ишетергә тура килде.**



Ябалаҡлап яуған ҡар, һис шикһеҙ, бик матур күренеш. Әммә уның тиҙ арала ғүмерҙе ҡыл өҫтөнә ҡуйыр хәүефкә әйләнеүен дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Үҙең шул хәлгә ҡалмайынса, буранға ышанып булмай, шулай ҙа был осраҡта иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалыу иң дөрөҫө буласаҡ. Әле көндәр йылытҡас та ҡотораса аҡман-тоҡман, бишҡунаҡ бурандары ла алда, улар ҙа, ғәҙәттә, оҙайлы ялдарға тура килеү сәбәпле, тиҫтәләгән "кыйыуҙарҙы" үҙенең ҡорбаны итәсәк.

Һепертмә буран юлдарға тиҙ генә ҡар һырынтылары өйә - автомагистралдәрҙә юл хәрәкәтенең туҡтауының төп сәбәбе ошо. Шулай уҡ юлдың бөтөнләй күренмәүе арҡаһында автомобилдең юлдан ситкә төшөп китеүе, ҡаршы килгән машиналарға бәрелеү ҡурҡынысы ла бар. Шуға ла юлда саҡта буранда бикләнеп ҡалдығыҙ икән, машинаны туҡтатып, көтөү хәйерлерәк, ти белгестәр. Етмәһә, юлда туҡтау - ул ярҙамдың тиҙерәк килеүенә лә нигеҙ. Ел алдан иҫһен - бында төп талап ошо. Был осраҡта двигателде ҡыҙҙырып, машинаны йылытып алған саҡта һөрөм еҫенә ағыуланмаясаҡһығыҙ. Автомобиль вентиляцияһы аша салонға ингән ағыулыҡ яныуҙан барлыҡҡа килгән газдар сатлама һыуыҡҡа ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ. Радиатор рәшәткәһен тент менән ҡаплау яҡшыраҡ.

Әгәр ҙә машина эсендә бер нисә кешеһегеҙ икән, кемдәлер ярҙам артынан ебәреү ҙә дөрөҫ түгел. Бының яҡшы тамамланыуы икеле. Әгәр ҙә йәйәү китеп барғанда буранға эләкһәгеҙ, елдән һәм ҡарҙан һаҡлаясаҡ ниндәй ҙә булһа ышыҡ кәрәк. Бик тә бик бер нәмә лә булмаһа, ҡарҙың үҙен ышыҡ итеп ҡулланырға ҡала.

Ике осраҡта ла һыуланмаҫҡа һәм йылыны һаҡларға тырышырға кәрәк. Усаҡ тоҡандырырға була, ул йылытасаҡ та, ҡотҡарыусыларҙың күҙенә лә тиҙерәк эләгәсәк. Әгәр ҙә машина эсендә ултыраһағыҙ икән, двигателде һүндермәгеҙ, был йылыны һаҡлау өсөн кәрәк. Тик төтөн сығыу юлы ҡар менән ҡапланмаған булһын, был иһә ағыуланыу хәүефен арттыра. Ваҡыты-ваҡыты менән ишекте асып, өйөлгән ҡарҙы ситкә шылдырып тороу кәрәк. Был ҡар менән ҡапланмаҫ өсөн эшләнә.

Ҡотҡарыусылар яғыулыҡ запасы булыуы ла мөһим, тигән фекерҙә. Шуға ла буран мәлендә яғыулыҡ станцияһы осрау менән бакты тултырыу, шулай уҡ 1-2 литр бензинды айырым һауытҡа һалып алыу кәңәш ителә. Яғыулыҡтан тыш, багажнигығыҙҙа сағыу төҫтәге тент, көрәк, балта, бысҡы, яҡшы бысаҡ, арҡан ятһын. Шулай уҡ буксирға алыу өсөн трос һәр водителдә булырға тейеш. Шулай уҡ машинала телефондың батареяһына көс йыйҙырыу мөмкинлеген хәстәрләгеҙ.

Һыу эсегеҙ, һыу юҡ икән, ҡар иретегеҙ. Ҡар ашау тыйыла, ауырып китерһегеҙ. Юлға ризыҡ алған булһағыҙ, уны бер нисә көнгә етерлек итеп бүлегеҙ. Бер юлы бар ризыҡты ашап бөтөрмәгеҙ, алда нимә көткәнен белмәйһегеҙ бит. Буранда етешәр көн ултырған кешеләрҙең дә имен ҡалыу осраҡтары бар, шуға ла үҙегеҙҙе яҡшыға көйләгеҙ. Буран мәлендә кешенең төп "дошман"ы - һыуыҡ. Шуға ла йылыныу өсөн бөтөн сараларҙы ҡулланығыҙ.

# КИЛӘСӘГЕМ! АС ҺИН ИШЕГЕҢДЕ!

**(Поэма)**

*Бер аяғың баҫһа бөгөнгөгә,*
*Иртәгәгә баҫһын берәһе,*
*Эштән өйгә ҡайтҡан һымаҡ,*
*Киләсәккә ҡайтып йөрө һин...*
***Рәми ҒАРИПОВ.***



*"- Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!*
*- Кем тупһамда? Кемде күрәм мин?*
*- Танымайһыңмы әллә?*
*Мин ҡайттым бит!*
*- Ас тиҙерәк! Был мин - Рәми..."*

Ҡала алманым шул баҡыйлыҡта,
Тура әйтәм, түгел кинәйә.
Ҡайттым бына хаҡлыҡ теле булып,
Тарих түгел, түгел риүәйәт.

Төшөгөҙҙә түгел, өнөгөҙҙә,
Ысынбарлыҡ, ҡайттым мин һинә.
Мин һаман да шул уҡ, үҙгәрмәнем,
Бер ни булманы һис Рәмигә.

О, ни күрәм, бында үҙгәрештәр,
Күҙҙәр ҡыҙып, иҫтәр китерлек!
Африканан тороп уҡып була,
Шиғыр китаптарым - интернет!

Үҙегеҙҙе танымай ҙа торам,-
Бөткәнһегеҙ хаттин үҙгәреп.
Тауҙар ғына тоғро асылына,
Уралтауым ята күгәреп.

Мин киткәндә ҙур мөғжизә ине,
Серле һандыҡ ине ЭВМ.
Ата-әсә смартфонын һыйпай,
Бәпләү урынына сабыйын.

Күтәрелеп минә ҡарамайҙар,
Тапҡандар бит тормош уңайын.
Ватсап аша аралашыу үәт шәп,
Хатта һөйөшөү ҙә онлайн.

Супермаркет, секонд хендтар, фәлән...
Машиналар - күҙҙәр ҡамашыр.
Быға тиклем йөрөгәнмен икән
Тарих урманында аҙашып.

Юҡҡа сыҡҡан Ленин тәғлимәте,
Илем белмәй ҡайҙа барғанын.
Үҙем күрҙем сабый балаларҙың
Доллар күреп күҙе янғанын.

Ошомо ни миллион ҡорбан биреп
Беҙ төҙөгән яҡты киләсәк?
Ә бит инанғайныҡ киләсәктә
Коммунизм тиеп еңәсәк...

Өфөбөҙҙә ниндәй төҙөлөштәр! -
Ике ятып төшкә инмәҫлек.
Күрер өсөн ошо матурлыҡты
Нисек инде ҡайтып килмәҫһең?

Вәлидиҙең урамынын Бабич
Салауатҡа әйҙәп ҡаршылай.
Ҡайҙа ғына барма, бар урында
Кешеләрҙән артыҡ машина...

* * *

Ҡала алманым шул үткәндәрҙә,
Үткәндәргә тиҙәр - салауат!
Ҡайтыр саҡта батырыбыҙ әйтте
Халҡыбыҙға, тиеп, сәләм әйт.

Сәләм әйтте йүг(е)рек Йүрүҙәнгә,
Уралтауға, Эҫем, Әйенә.
Ыжғыр ҡышҡа, моңһоу көҙҙәренә,
Ярһыу яҙға, йәмле йәйенә.

Айырата сәләм ғүмерҙәрен
Халҡыбыҙға арнағандарға.
Әминә лә тигән һылыуҙарға,
Уландарға - Рамаҙандарға!

Батырыбыҙ ожмах баҡсаһында,
Ул - Аллаһтың бөйөк сардары!
Ҡайтыуымдың төп маҡсаты шуға
Рухын һеҙгә, ергә ҡайтарыу.

Йомош-юлға ярағаным өсөн
Эй, ҡыуандым, бындай мәртәбә...
Элегерәк белһәм, донъяларҙан
Мин китер ҙә инем иртәрәк.

Иртә китеп, кире фанилыҡҡа
Ҡайтыр инем мәгәр иртәрәк...
Тауҙың бейеклеген күрер өсөн
Күсер кәрәк икән ситкәрәк.

Ғүмер тигән тауҙың бейеклеге
Күренмәй ҙә икән үренән.
Фани донъяларҙың яҡтылығы
Баһалана төшкәс гүренә.

Салауатты тик бер күрер өсөн
Донъяларҙан икән китерлек.
Эх, ул теләк ожмахтарҙы тамуҡ,
Тамуҡтарҙы ожмах итерлек.

Ул Хоҙайҙы, Хоҙай беҙҙе һаҡлай,
Тере әле, тере Салауат!
Ошо хаҡта әйтер өсөн ҡайттым,
Салауаттан һеҙгә аманат.

Ысын донъя Салауатлы ерҙә,
Бындағыһы бары һағым ул.
Йәнде унда тик бер тойҙо игәй -
Тыуған еребеҙҙе һағыныу.

*"Күрер өсөн тинек был ерҙәрҙе*
*Ожмахтарҙан ҡайтып килерлек..."*
Тиеп яҙған Түләк, минең дә бит
Тәҡәттәрем бөттө түҙерлек.

Халҡым ғына йәшәһен тим ерҙә,
Ҡалғанына була түҙергә.
Әҙер йәнем халҡым йәшәгәндә
Мең ҡат тыуып, мең ҡат үлергә.

* * *

*"Үлмәм әле,*
*Үлмәм!*
*Мин - Үлән.*
*Сыҡ әле,*
*Сыҡ,*
*Һин - Ысыҡ!.."*

Һабағына йәбештем дә
Ерҙең өҫтөнә сыҡтым.
Һис юғы ла ҡышҡа тиклем
Йәшәргә тип ашыҡтым.

Ҡояш нурын йәнем иттем,
Ҡаным иттем ысыҡты.
Йәшәлмәгән йылдарымдың
Һулышына асыҡтым.

Үләндәргә йәбешеп тә
Йәшәп була ла икән.
Ҡышҡа тиклем - тотош ғүмер,
Һауа һула ла икән.

Үлән булып бер йәй йәшәү
Сәхрәлектә - ожмах.
Йәйҙә мәңге йәшәп булмай,
Ҡалһа ла бит оҡшап.

Ер өҫтөндә бөтә нәмә,
Бары - миҙгел генә.
Ваҡытлыса икәнлеген
Аңлай һиҙгер генә.

Бар тереклек ынтыла тик
Йәшәп ҡалырға тип.
Ожмахтарға етер өсөн
Старт алырға тип.
Һабаҡтарың ҡышын һулып,
Аптырап ҡалма бер ҙә.
Һәр яҙ һайын терелерһең,
Тамырың ҡалһа ерҙә.

Юҡҡа ғына шәжәрәне
Ағасҡа тиңләмәйҙәр.
Шәжәрәһе өҙөлгәнде
Ҡороған тал тимәйҙәр.

Тамырҙарға йәбештем дә,
Ерҙең өҫтөнә сыҡтым.
Балаларым ҡарашына,
Ейәндәргә асыҡтым.

* * *

Һағыныуҙың сиктәренә сыҡтым,
Балаларым - күҙем ҡаралары,
Бер күрергә зар-интизар булдым,
Балаларым - йөрәк яралары...

Ҡайттым күреп тағы бер йәшәргә
Балаларым - күҙем ҡаралары.
Субырҙап та аҡҡан күҙ йәшегеҙ
Ҡәбер ғазабынан араланы.

Барығыҙҙан бер мәл сәләмдәрҙе
Салауатым килеп тапшырғайны.
Ҡайғырһам да уны янда күреп,
Ҡараңғы ла гүрем яҡтырғайны.

Лилиә лә бында, икәү инек,
Салауатты һис тә көтмәгәйнек.
Уларҙың бит фани донъяларҙа
Һулар һауалары бөтмәгәйне.

Оҙаҡ сыҙаманы әсәйегеҙ
Килеп етте эҙләп артығыҙҙан.
Ғариповтар баҡый донъяларҙа
Йылдам ғына шулай артабыҙ ҙа...

Барыһына атай-әсәй булып
Тороп ҡалдың улым, Азаматым.
Уң ҡулым һин хәҙер, һул ҡулым да
Фани донъяларым аманаты!

Ҡарағайҙар тамырҙарын тотһам,
Иҫкә төшә һәр саҡ тубырсығың.
Тотош взвод ейән-ейәнсәрҙәр
Булып киткән һинең уйынсығың...

Һайлам уҡтай сая ейәндәрем,
Юлай, Йәлил икән аттарығыҙ.
Шундай бай тарихлы халыҡтың һеҙ
Улы булғанына шатланығыҙ!

Ейәнсәрҙәрем - алтын ашыҡтай:
Нәркәс, Шәүрә, Асия, Миләүшә,-
Исемегеҙ шишмә йыры кеүек -
Рәмиләкәй, Ләйсән һәм Әйшә...

Ҡайһы ғына ике араларҙа
Тал-тирәктәй үҫеп киткәнһегеҙ,
Буй-һынығыҙ, аҡылығыҙ менән
Балиғ йәштәренә еткәнһегеҙ.

Күмәкһегеҙ, татыу, берҙәмһегеҙ,
Ғариповтар бында тотош халыҡ...
Килегеҙсе, һеҙҙе тупылдатып
Һөйәйемсе арҡағыҙҙы ҡағып.

Мин киткәндә йоҡлап ҡына ҡалған
Эй, һағындым ҡыҙым Гөлнарамды.
Ишетәбеҙ көн дә баҡыйлыҡта
Рояленән килгән моң-зарыңды.

Һағынамын яурыныма алып
Өфө урамында йөрөгәнде.
Тағы күпме һине ҡурсаланым,
Устарыма алып йөрәгемде.

Терәк булалмағас тормошоңда,
Һүҙем булһын тиеп теләк-маяҡ.
Әсәйеңә биреп ҡалдырғайным,
Уҡытҡандыр, тием ҡыҙым Хаят:

*"Һин теремек булып тыуҙың,*
*Хаят ҡыҙым,*
*Был донъяла балҡып йәшә,*
*бул йондоҙом.*
*Аҡ ҡайындар атайыңдың сал сәсендәй,*
*Һиңә һәр саҡ юлдаш булһын -*
*юл бик оҙон!"*

Башығыҙҙан тик бер һыйпар өсөн
Ҡайттым, балаларым, ейәндәрем.
Әйтеү итеп әйткән ошо һүҙем,
Йәнегеҙгә һеңһен, эйе, йәме?

Йәшәүҙәрем бер тингә лә тормаҫ,
Кемдер әйтһә бер саҡ йәҙгә бәреп:
Туған телен белмәй үҫә тиһә
Рәми Ғариповтың ейәндәре.

Мәңгелеккә йәнем тыныс ҡалыр,
Башҡортса төш күреп уянһағыҙ!
Әсәм теле - сәсән теле, тиеп,
Мине һәр саҡ иҫләп йыуанһағыҙ.

Азаматым, һин командир бында,
Һине алда бөйөк эштәр көтә.
Бүләр-бүләсәргә киләсәккә
Еткерергә рухи эстафета.

* * *

*"...Һуңғы тапҡыр мин класҡа инәм,*
*Һәм ҡарайым таныш картаға:*
*Юлдар, юлдар...*
*Төрлө яҡҡа китә.*
*Хуш булығыҙ инде, парталар..."*

Мәктәп менән шулай хушлашҡайным,
Оло юлға сығыр алдынан.
Мотлаҡ унда тағы уҡыр инем
Тыуыр булһам әгәр яңынан.

Күңелемдә шундай тулҡынланыу,
Ишетәмен йөрәк ҡағышын.
Яңы ғына һуғыш тамамланған
Бала саҡҡа оса һағышым...

Хәтеремдә сабаталар кейеп,
Биштәремә һалып һәләмеп,
Өфө ҡалаһына йүнәлгәйнем
Вагон баштарына эләгеп.

Ҡырҡ алтынсы йылда тәүге тапҡыр
Баш ҡалаға аяҡ баҫҡайным.
9-сы мәктәп-интернаттың
Ишектәрен тәүләп асҡайным.

Ишек киңә түгел китап бите, -
Бында астым оло донъяны.
Мин донъяны, донъя мине асты,
Уға тиңдәш мәктәп буламы?

Донъя сере иждад сере ине,
Ҡатмарлы ла ине, ябай ҙа.
Арҡауылда тыуған "Ҡырмыҫҡа"ны
Әйләндерҙе мәктәп "Бабай"ға.

Атайҙарҙың ҡәберҙәрен эҙләп
Дон далаларында үҡһенек.
Рифғәт менән Роман ҡаяһына
"Шайморатов" һүҙен сүкенек.

✓ *Ағай-ҡустылар һәм түрәләр юҡ,*
*Барыбыҙҙа бер үк дәрәжә.*
*Асылыбыҙ - утә күренмәле,*
*Ябынып та булмай пәрәнжә.*



Үҙебеҙсә шулай биргән булдыҡ
Генералға Герой исемен.
Мин сүкенем, Рифғәт шиғыр яҙҙы
Ҡанатланып ярһыу хис менән:

*"...Ташҡа уйып, ҡая күкрәгенә*
*Шайморатов исеме яҙылған...*
*Уның данын мәңге юя алмаҫ*
*Көслә ямғыр, ыжғыр елдәр ҙә...*
*Уны һөйөп һәр саҡ иҫкә алыр*
*Башҡорт халҡы килер көндәрҙә..."*

Ике мең дә егермелә генә
Танынылар сүкеп яҙғанды.
Хәҡиҡәтте һис йәшереп булмай,
Ысын итеп булмай ялғанды.

Әле ҡайтҡас тәүге ишеткән һүҙ:
Шайморатов - Рәсәй Геройы!
Шуға тиклем халҡы йөрәгендә
Ил батыры булып йөрөнө!

Өс кенә йыл үткән ине ул саҡ,
Ерҙә оло һуғыш уҙғанға.
Миналар ҙа һаман шартлай ине,
Таралмаған ине томандар.

Кем уйлаған, ошо тарафтарҙа
Бөгөн тағы яуҙар ҡубырын.
Таңыбыҙҙың аяҙ атырына
Биргәйне бит атай ғүмерен.

Аямаған йәнен, түккән ҡанын
Башҡорт атлылары яуҙарҙа.
Ил башлығы улар хөрмәтенә
Ҡабул иткән күпме ҡарарҙар.

Сталиндың күрһәтмәһе менән
Мин уҡыған мәктәп асылған.
Яуҙа һәләк булған башҡорттарҙың
Балалары өсөн, асылда...

Былдай хоҡуҡ яугир атайҙарҙың
Ҡаны менән түләп яуланған.
78 Герой бының өсөн
Ҡаһарманлыҡ менән дан алған.

СССР-ҙа тик бер генә мәктәп
Беҙ уҡыған данлы интернат.
Батырлыҡты һатып алып булмай
Һәм алып та булмай ер тырнап.

Башҡорт зыялыһы сәңгелдәге,
Тойҙорта ул рухты, тел тәмен.
Милли кадрҙарҙы әҙерләүсе,
Башҡорт яугирлығы һәйкәле.

Башҡорт яугирлығы шаһиттары
Десна, Одер, Днепр, Дон аға.
Улар һаман йолаһына тоғро,
Башҡасараҡ хәҙер донъялар...

Ахырыһы ул йылғалар оҙаҡ
Күрмәй торһа башҡорт яугирын.
Тонолланып йәнә буйракланып
Онотальр, бәлки, ағырын...

...Әле бына мәктәбемә килдем.
Һаумыһығыҙ, дуҫтар, туғандар!
Тик ни күрәм, минең исемемде
Алтаҡтаға яҙып ҡуйғандар.

Көтөлмәгән ошо күренештән
Уңайһыҙ ҙа, уҙе рәхәт тә.
Мин генәме бында уҡығанмын
Атай йортона тиң мәктәптә.

Кемдәр тиһең, кәрәк булһа әгәр
Мин уларҙы әйтеп үтәмен:
Мәшһүр ғалим Нияз Мәжитов һәм
Хәсәйенов - фекер титаны!

Тағы ла бер тарих темаһына
Индерәйем бер аҙ аныҡлыҡ:
Әсфәндийәров бирҙе ауылдарға
Тыуыу тураһында таныҡлыҡ.

Директорҙар, уҡытыусыларым
Кеше булығыҙ, тип өйрәткән.
Беҙҙән шәхес ижад итеүселәр
Барыһы ла лайыҡ хөрмәткә!

Республика. Башҡорт. Гимназия -
Был һүҙҙәргә хаттин шатландым.
Проспект буйлап йәйәү килгәйнем дә,
Хәҙер инде атҡа атландым.

Тәүге тапҡыр класыма инәм
Үҙем исемдәге мәктәптең.
Иҫкә төшә әйтеп ҡалдырғаны
Грек фәйләсуфы Сократтың.

"Үҙ-үҙеңде аңла"р өсөн дә бит
Кәрәктер ул бында килеүем.
Үҙең исемдәге мәктәптәге
Класыңа килеп инеүең.

Дон буйында күргән-кисергәндәр
Һалды, ана, ниндәй уйҙарға.
Үҙ-үҙеңде аңлар өсөн дә бит
Фанилыҡҡа барып урарға.

Ике донъя араһында ҡалып,
Уйланғанда тормош хаҡында.
Йәшәүеңдең мәғәнәһе юҡтыр
Алыҫ булһаң әгәр халҡыңдан.

*"...Шиғыр кеүек булһын бар тормошоң,*
*Тормош кеүек булһын шиғырың -*
*Шулай йәшәргә бит тырыштым мин,*
*Икеһен дә бергә һыйҙырып..."*

* * *

Беҙ шағирҙар бында күмәгәйҙек,
Тотош союз, Бабич - ҡор башы.
Һәр бер килеүсенән ил хәлдәрен
Беҙ торабыҙ һәр саҡ һорашып.

*"...Ил бәхете менән бәхетлебеҙ,*
*Ил ҡайғыһы менән ҡайғылы.*
*Иң ҙур бәхетһеҙлек булыр ине*
*Шул ҡайғынан беҙгә айырылыу..."*

Был юлдарҙы мин бит яҙған инем
Фанилыҡта булған сағымда.
Баҡыйлыҡҡа күскәс был һүҙҙәрҙең
Мәғәнәһе артты тағын да.

Ике донъя рәхәтлеген татыу
Яҙмағандыр инде беҙҙәргә.
Йыйылышып бергә көйөнәбеҙ
Шомло хәбәр килһә һеҙҙәрҙән.

Аҙан әйтеп намаҙлыҡҡа әйҙәй
Имам-хатибыбыҙ Аҡмулла.
Доғаларҙы беҙгә өйрәтеүсе
Иманыбыҙ күрке хаҡ мулла.

Ике Назар, ике Бикбай бында,
Йәнә Мостай, Әбүс, Ниғмәти...
Барыбыҙ ҙа халыҡ шағирҙары,
Барыбыҙ ҙа бында типә-тиң...

Ағай-ҡустылар һәм түрәләр юҡ,
Барыбыҙҙа бер үк дәрәжә.
Асылыбыҙ - утә күренмәле,
Ябынып та булмай пәрәнжә.

Фанилыҡта пинжәк түштәрендә
Тороп ҡала миҙал-ордендар.
Фанилыҡта ҡылғаныңа ҡарап
Ике тарафҡа тик ордер бар.

Тән булмағас хатта һуғып булмай,
Кемдәргәләр йәнең көйгәндә.
Хур ҡыҙҙарын һурып үбеп булмай,
Һөйөлһәң дә унан, һөйһәң дә.

Йәшерәктәр берәм-һәрәм түгел
Килә икешәрләп, дүртәрләп.
Түләк, Ғәбиҙулла, Буранбайы,
Йәнә Ғилман, Рәмил Ҡолдәүләт...

Дамир Шәрәфетдин баҡыйлыҡҡа
Килеп инде тура фатирға.
Фатиры ла, комфорты ла булғас,
Һис уйламай бынан ҡайтырға.

Шуныһы бар: бында яҙып булмай,
Килгәс кенә шуны аңланыҡ.
Мең ҡат тикшерелеп, яуап һорай
Фанилыҡта һәр бер яҙғаның.

Яуаплыһың һәр бер ымыңа ла,
Ғәмәл генә түгел, уйыңа.
Әйтерһең тик яза алыр өсөн
Йәшәйһең тик ғүмер буйына.

Донъяныҡы донъялыҡта ҡала -
Тиеп әйтеүҙәре ялған ул.
Хатта диндән, намаҙлыҡтан ҡыуа
Донъя тигән бөйөк алданыу!

Бында барыбыҙ ҙа намаҙлыҡта,
Мөмкин түгел шунһыҙ баҡыйлыҡ.
Фанилыҡта намаҙ уҡымауҙың
Язаларын бында татыйһың.

*"...Тик алданма арзан дан-шөһрәткә,*
*Үткән сакта ғүмер юлынан.*
*Йәшен йәшнәй тәүҙә, күк күкрәүе*
*Ишетелә бары һуңынан..."*

* * *

Рауил килгәс тә
Уҡыны хатын:
Ҡуҙғал милләтем,
Уян да халҡым!

Йәшен һуҡҡандай
Көн аяҙында:
Хәүефле хәбәр
Поэмаһында...

Тел йәшәгәнгә
Ҡалғайныҡ тере.
Башҡортса һөйләп
Булғайныҡ һере.

Ҡасан йоҡҡандыр
Маңҡортлоҡ сире?
Хәҙер сабыйҙың
Башҡаса теле.

Былдай хәлдәргә
Бармы аңлатма?
Заманда гәйеп,
Тиеп алдатма!

Һәр дәүерҙә лә
Бәндәгә һынау.
Кем нисек үтер, -
Заман ул Хоҙай!

Әйткән бит Хоҙай:
Кемдәр әүендә
Алыштырам тип
Башҡа ҡәүемгә.

Йүгереп ҡайтып
Тыуған яғыма,
Ҡайтҡандай булдым
Бала сағыма.

Мин киткән саҡта
Ҡалған малайҙар
Күптәре юҡтар,
Күбе бабайҙар.

Ҡалмаған ерҙә
Элекке ауыл.
Уның өҫтөнән
Үткәндәй дауыл.

Гүйә ауыҙҙың
Һирәк тештәре.
Себергә киткән
Ауыл йәштәре.

Асылға тоғро
Ҡанатлы дуҫтар.
Нәк элеккесә
Һайраша ҡоштар.

Үҙ ләғәтендә
Сип-сип бәпкәләр,
Шулай Хоҙайға
Рәхмәт әйтәләр.

Теленә тоғро
Хатта ҡарғалар.
Башҡа ләғәттә
Ниңә балалар?

Салауат яҙған
Һандуғас, сәскә
Һаман Хоҙайға
Тәсбихен әйтә.

Тирәк боронса
Мамығын ҡоя.
Башҡорт сабыйы
"Мама" тип ҡуя.

Әллә донъяға
Килдеме ҡырғын?
Ҡайҙан һуң хасил
Әвсүкле ырҙын?

Былдай күренеш
Ҡайҙан һуң хасил?
Башҡа ләғәткә
Ҡасамы асыл?

Барса тереклек
Асылға тоғро.
Беҙҙең баҡсаға
Төшкәнме уғры?

Төштә ҡалырмы
Хуш еҫле кәрәҙ?
Телде һаҡларға
Нимәләр кәрәк?

Кәңәш ҡоророға
Ҡысҡыртып һорнай.
Туған телебеҙ
SOS ярҙам һорай.

Тағы ҡайтайым
Баҡыйлығыма.
Бабич ҡоронан
Кәңәш һорарға.

Аҙандар әйтеп,
Намаҙлыҡ йәйеп,
Бөйөк Аллаһҡа
Башыбыҙ эйеп.

Баҡыйлығыма
Ҡайта һалайым.
Телебеҙ һаҡлар
Сара табайыҡ.

* * *

*"...Таң әтәстәре ҡысҡыра,*
*Әллә таң ата микән?*
*Ниңә хәҙер был һуҡмаҡтан*
*Мин яңғыҙ ҡайтам икән?.."*

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Хоҙай әтәс теле менән
Нимә тип әйтә икән?

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Донъя фани икәнлеген
Улар аңлата микән?

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Ғүмер ҡыҫҡа икәнлеген
Улар аңлата микән?

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Йәндең күпме ауырлығы,
Күпмерәк тарта икән?

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Ғүмер-ҡояш бер ҡалҡа ла,
Бер килеп бата икән.

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Йәндең үлә тигәндәре
Бары бер хата икән.

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Баҡыйлыҡҡа улар беҙҙе
Шулай оҙата икән.

Таң әтәстәре ҡысҡыра,
Әллә таң ата микән?
Тик төш булған фанилыҡтан
Улар уята икән.

*"...Таң әтәстәре ҡысҡыра,*
*Әллә таң ата микән?*
*Ниңә хәҙер был һуҡмаҡтан*
*Мин яңғыҙ ҡайтам икән?.."*

* * *

*"...Барлыҡ йыуанысым шиғырҙарҙа,*
*Бар бәхетем халҡым телендә.*
*Халҡым ҡалһа, әле мин ҡалырмын,*
*Һүҙем йәшәр әле илемдә..."*

Шиғырҙарым - ваҡыт машинаһы,
Шиғырҙарым - ваҡыт бизмәне.
Улар йәшәгәндә киләсәккә
Ҡайтып йөрөүҙәрҙән биҙмәмен.

Ултырҙым да шиғыр карабыма
Әле бына барып ураным.
Үткәндәргә үҙ сәләмен әйтте
Уралып та ятҡан Уралым.

Янғыраһа әгәр шиғырҙарым
Һәр саҡ шулай ҡайтып йөрөрмөн.
Шиғырҙарым йәшәүенә ҡарап
Телем йәшәгәнен белермен.

*"...Әсәм теле миңә - сәсән теле, -*
*Унан башҡа минең халҡым юҡ.*
*Йөрәгендә халҡы булмағандың*
*Кеше булырға ла хаҡы юҡ..."*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Өлкән йәштәге кешеләрҙең күп кенә хроник сирҙәре аҙып китмәһен тиһәгеҙ, керән ашағыҙ. Керәндә С, В төркөмө витаминдары, магний һәм кальций күп. Был составты шартлы рәүештә "оҙаҡ йәшәү витамины" тип атарға була.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘРТИП БУЛҺЫН

■ Ултырып эшләүҙән нисек һимереп китмәҫкә? Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының "Дауалаусы-реабилитациялаусы үҙәк" табибы, гастроэнтеролог әйтеүенсә, хатта хәрәкәт аҙ булған саҡта ла углеводтарҙан баш тартырға кәрәкмәй. Һәр кешегә лә йәшәү өсөн ниндәйҙер күләмдә калориялар кәрәк. Уны махсус калькулятор һәм формула менән иҫәпләп сығаралар. Хәрәкәт аҙ булған һайын калориялар ҙа аҙыраҡ тотонола. Бындай кеше күберәк ашаһа, уның һимереп китеүе бар. Шуға ла уларға спорт менән дуҫ булырға, рационын күҙәтеп торорға кәрәк. Иттең майһыҙыраҡ сорттары, балыҡ, һөт ризыҡтарына өҫтөнлөк яһағыҙ. Углеводтар ҙа энергия сығанағы, кәнфит, һут, газлы эсемлектәр, зефир, мармелад кеүек ябай углеводтарҙан тыйылып торһағыҙ ҙа, ярмалар кеүек оҙаҡ эшкәртелеүсе углеводтар рационда көн һайын булһын. Ашҡаҙанда десерт өсөн һәр ваҡыт урын табыла, сөнки ул ашҡаҙанға төшмәй, ә күңелгә яғылып, кәйефте күтәрә, тиһәләр ҙә, десертты аҡыл менән һайларға кәрәк. Шәкәрҙән генә торған кәнфит һурғансы, 10-20 грамм сифатлы әсе шоколад ашағыҙ.

■ Душ инеү өсөн ниндәй һыу яҡшыраҡ - эҫеме, әллә һалҡынымы? Был һорау күптәрҙе борсой, имеш. Бында барыһы ла кешенең үҙенән тора, ти белгестәр. Йәғни, һалҡын һыу менән ҡойоноп сығыуға өҫтөнлөк бирәһегеҙме, әллә ҡайнар һыу аҫтында йыуынаһығыҙмы, үҙегеҙ хәл итәһегеҙ. Һалҡыныраҡ һыу кешене уятып ебәрә, уның иғтибары көсәйә, метаболизм яҡшыра. Дерматологтар һалҡын һыу менән сәс сайҡатырға тәҡдим итә, был саҡта баш тиреһендәге ҡан йөрөшө һәйбәтләнә. Бит тиреһен дә һалҡын һыу менән йыуырға ҡушалар. Йылы һыу ҡан әйләнешен көсәйтә, ҡан тамырҙарын һығылмалы яһай. Йылы һыу менән йыуынғандан һуң йоҡларға ятһаң, шунда уҡ сабый кеүек тәрән йоҡоға таласаҡһың, ти белгестәр.

■ Өлкән йәштәге кешеләрҙең күп кенә хроник сирҙәре аҙып китмәһен тиһәгеҙ, керән ашағыҙ, ти медицина фәндәре кандидаты, табип-диетолог Андрей Бобровский. Керәндә С, В төркөмө витаминдары, магний һәм кальций күп. Был составты шартлы рәүештә "оҙаҡ йәшәү витамины" тип атарға була, сөнки улар бөтөн тиерлек ауырыуҙарҙы иҫкәртә ала. "С витамины иммунитетты нығыта. Ҡайһы бер осраҡтарҙа керән микробтарға, вирустарға ҡаршы көрәшеүсе сара ла булып тора. Шуға ла уны яҡшылап өйрәнеү кәрәк", - ти диетолог.

■ Төш ваҡытына ҡарай арыу һиҙәһегеҙме? Белгестәр 4 ысул тәҡдим итә, уларҙы эшләгәндән һуң, көсөгөҙ артып китәсәк, тиҙәр улар. Беренсеһе, эш өҫтәлен тәртипкә килтерегеҙ. Тәртип урынлаштырыу үҙе лә, шулай уҡ һәр нәмәнен үҙ урынын таба барыуы ла энергияны арттыра икән. Өҫтәлдәге тәртипһеҙлек баш мейеһенә кире тәьҫир итә. Арыу ярҙамында организм һыу кәрәклеге тураһында ла иҫкәртә. Шуға ла боҙ киҫәге һалынған һыу эсеп алығыҙ. Өсөнсө кәңәш - бер нисә физик күнекмә яһағыҙ. Бик булмаһа, кирелеп-һуҙылып алыу ҙа файҙалы. Дүртенсеһе - розмариндың эфир майын еҫкәгеҙ. Ул энергияны ғына түгел, эшкә һәләтлелекте лә арттыра.

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# АҠ МЫЙЫҠЛЫ БАБАЙҒА ЛА...

## барыбер ағай кәрәк...

**"Мин ағайһыҙ үҫкән малай...Туҡмалдым һирәк-мирәк...Ә бөтөнләй туҡмалмаҫҡа мотлаҡ бер ағай кәрәк", тип башлана Әнғәм Атнабайҙың бер шиғыры. Мин үҙем, әлбиттә, ағайһыҙ үҫмәнем. Бер туған ике ағайым бар. Өлкәне - Ғайса, минән ун биш йәшкә олораҡ, инде һикһәндә аша атлаған. Ә Юлай ағайымдан мин ни бары өс йәшкә кесемен. Бына шул Юлай ағай хаҡында бөгөн һүҙем. Ин шәә Аллаһ, ошо ҡәҙерле кешем быйыл етенсе тиҫтәһен тултыра.**

Ағайым Баймаҡ районы Мәмбәт ауылында урта мәктәпте тамамлағас, бер аҙ ғына совхозда эшләп, ун һигеҙ йәше тулғас та Совет Армияһы сафына алынды. Төркмәнстанда, унан Үзбәкстандың Чирчик ҡалаһындағы хәрби танк училищеһында инструктор булып хеҙмәт итеп йөрөгән өлкән сержант ағайым менән тиҫтерҙәрем араһында һәр саҡ ғорурлана инем. Мин мәктәпте тамамлауыма, ул әрме хеҙмәтен бөтөрөп, ҡайтып та килде. "Ҡайҙа уҡырға барырға ниәтләйһең, ҡустым?" - тип һораны һәр саҡ "теҙгенде ҡыҫҡа торорға" яратҡан ағайым. "Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә барам тип йыйынып йөрөйөм әле..." "Әйҙә, киттек, медка! Икебеҙ өсөн дә табип һөнәре ҡулайлыраҡ булыр тип уйлайым. Атай-әсәй ҙә инде олоғайып килә..."

Бәләкәй саҡтан ихтирам итеп, уны һәр саҡ тыңлап йөрөгән ҡусты булараҡ, әллә ни оҙаҡ уйлап та тормаҫтан, был тәҡдимде ихлас ҡабул иттем һәм бергәләп имтихандарға ла әҙерләнә башланыҡ. Ә инде икебеҙ ҙә бер юлы институтҡа инеп киткәс, атайым менән әсәйемдең шатлығының иге-сиге булманы. Бына шулай, табип булып китеүемә Юлай ағайым сәбәпсе булды, тип һис кенә лә икеләнмәй әйтәм һәр ваҡыт.

Бала саҡтан был ағайымдан бер тотам да айырылмай тиерлек, бергә үҫкәнгәлер ҙә, үҙемде малайҙар араһында гел генә яҡлаулы тойҙом. Бәғзе бер өлкәнерәк, "һуғышсан" малайҙар ҙа минә ҡағылырға баҙнат итмәй ине. Йәштәштәре араһында уның "көслө малай" тигән абруйы ла булды шул. Шуғамылыр, үҙенән олораҡ булған малайҙар араһында дуҫтары ла күп ине. Институтта уҡыған дәүерҙә лә дөйөм ятаҡ бүлмәһендәге егеттәр уны "староста" итеп һайланы. Ҡалын, көр тауышлы талапсан "башлыҡтың" һәр һүҙе "үтемле", уның аҡыллы кәңәштәрен барыбыҙ ҙа торорға тырыштыҡ. Ятаҡ бүлмәһендә тейешенсә тәртип, таҙалыҡ тотоу буйынса йәшерәктәрҙе, хатта үҙенең тиҫтерҙәрен дә ҡайсаҡ ныҡ ҡына итеп "быжғытып" та ала торғайны. Студент йылдарында бер-беребеҙҙе яҡлашып, һәр саҡ ярҙам итешеп йөрөгәнгәләр ҙә, уҡыу ҙа еңелерәк тойолдо.

Институттың аҙаҡҡы курстарында беҙҙең юлдарыбыҙ айырылды - мин Совет Армияһы сафына алынып, Куйбышев хәрби медицина факультетына күстем. Ҡулына диплом алыу менән Юлай ағайым Сибай медицина училищеһына уҡытыусы итеп тәғәйенләнде. Ун йыл дауамында булаcаҡ фельдшерҙарға, шәфҡәт туташтарына анатомия фәненән дәрес бирҙе. Студенттарҙың яратҡан уҡытыусыһы булып танылды һәм шул уҡ ваҡытта уҡытыусылар араһында ла ҙур абруй ҡаҙанды. Принципиаль йәш уҡытыусы бер нисә йыл ҡабул итеү комиссияһының яуаплы сәркәтип эшен уңышлы башҡарҙы.

Ун йыл училище эшләгәндән һуң, кеше анатомияһын тәрән белгән табип булараҡ, Урал аръяғы районДарының баш судмед эксперты вазифаһына тәҡдим ителде. Был һөнәрҙең төп тәғәйенләнеше - һәр төрлө аңһыҙ бәлә-ҡаза арҡаһында һәләк булған кеше органдарын "асып ҡарап", уларға дөрөҫ диагноз ҡуйып, үлем сәбәбен асыҡлап, хоҡуҡ һаҡлау органдарына ярҙам итеүҙән ғибәрәт булыуын һәммәбеҙ белә. Ошо ауыр эште атҡарыусы ағайымды ҡайһы бер коллегалары "доктор - милиционер" тип тә йөрөттө. Бәғзе ваҡыт шул эшенә бәйле, мәҙәк хәлгә лә юлыҡҡылай ине үҙе лә юморға бай ғына булған ағайым. Берәй мәжлестә ултырғанда, ғәҙәттә, ҡунаҡтар араһында ниндәйҙер табип булһа, ҡайһылар үҙҙәренең сире буйынса һүҙ ҡуҙғатырға ярата бит инде. Шулай бер саҡ ҡунаҡтарҙың береһе: "Әй, Юлай, һин врач бит, мин һинә бер күренергә киләйем әле..." - тип әйтә башлағас, ағайым: "Юҡ, һин, киреһенсә, миңә килмәҫкә тырыш!" - тип әйтеп ҡуйҙы. Һүҙҙең ҡайҙа барғанлығын аңлағас, барса ҡунаҡтар шаулашып, көлөшөп алды... Бына ошо яуаплы эштә утыҙ йыл эшләп, ағайым хаҡлы ялға сыҡты. Фиҙакәр хеҙмәте өсөн уға "Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау отличнигы" тигән маҡтаулы исем бирелдe.

ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ...

# ДИАГНОЗДАН ҠУРҠМАЙСА...

**СПИД республика үҙәге баш табибы Рафаэль Яппаров хәбәр итеүенсә, быйыл Башҡортостанда тыуғандан алып ВИЧ диагнозы йөрөткән өс ҡатын сәләмәт бала тапҡан.**

"Медицина өсөн был бик яҡшы күрһәткес, тимәк, дауалауҙың бөгөнгө заманса ысулдары ВИЧ диагнозлы ҡатындарға һау сабый табырға ярҙам итә. Бындай ҡатындар өсөн был бигерәк ҡыуанысл ы яңылыҡ, улар ҡурҡмайынса бала табырға йөрьәт итәсәк", - тип яҙа социаль селтәрендәге сәхифәһендә Рафаэль Яппаров. Был хәүефле сир менән осрашыусыларҙың тормошон яҡшыртыу һәм ғаилә ҡороу өсөн мөмкинлектәр биргән бындай яңылыҡтар тотош йәмғиәт өсөн дә ыңғай күренеш, ти ул.

# СӘМЛЕ УЙЫН

**Үткән шәмбе "Салауат Юлаев" хоккей командаһы КХЛ-дың даими чемпионатында Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ын 2:1 иҫәбе менән еңде. Күршеләш республикаларҙың был ике командаһы араһындағы уйынды көйәрмәндәр айырыуса көтөп ала һәм уның үҙенең генә атамаһы ла бар - "Йәшел бәйге".**

Команданың тренеры Виктор Козлов та был уйынды ыңғай баһаланы. "Салауат Юлаев" менән "Аҡ Барс" араһында бик яҡшы уйын булды. Алдан уҡ голдарҙың күп булмаҫын фаразлағайныҡ, әммә мөмкинлек бар икән, һәр ваҡыт гол индерергә тырышырға кәрәк. Ике команда ла енеүгә өмөт итте һәм шуға ла матч бик сәмле һәм ҡыҙыҡлы килеп сыҡты. Көйәрмәндәргә аренала үҙенсәлекле мөхит тыуҙырғандары өсөн айырыуса рәхмәт", - тине ул.

Уйында иҫәпте "Аҡ Барс" асты. Икенсе осорҙа "Салауат Юлаев" хоккейсыһы Александр Хмелевский иҫәпте тигеҙләне. Даниил Огирчуктың һөҙөмтәле голы арҡаһында Өфө спортсылары алға сыҡты һәм аҙаҡҡаса өҫтөнлөктө бирмәне. "Был "Йәшел бәйге"лә еңеү аулау - команда, Өфө һәм тотош республика көйәрмәндәре өсөн дә мөһим", - тине уйындан һуң Александр Хмелевский. Был уйындан һуң юлаевсылар Омскиҙың "Авангард"ын 7:2 иҫәбе менән еңде.

# БЕҘҘЕҢ ҠЫҪТЫБЫЙ!

**Башҡортостан ашнаҡсылары ғәйәт ҙур ҡыҫтыбый бешереп, 500-ҙән ашыу кешене һыйланы.**

Милли ризыҡты Минскиҙа "Ҡунаҡсыл Башҡортостан" фестивалендә әҙерләнеләр. Бының өсөн 40 килограмм картуф, 15 килограмм һуған, 12 килограмм он, 3 килограмм аҡ май, 4 литр һөт, 7 литр һыу кәрәк булды. Ҡыҫтыбыйҙы диаметры өс метрлыҡ махсус табала бешереп алдылар. Фестиваль Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһының Белоруссияға сәфәре ваҡытында ойошторолдо. Бынан тыш, ике көн буйына республиканың кулинарҙар, рестораторҙар һәм отельерҙар ассоциацияһы командаһы башҡорт милли ризыҡтары: итле һәм татлы гөбәҙиә, сәй-бәлеш, табикмәк, тары ярмаһы менән ҡыҫтыбый бешереү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Шулай уҡ Минск халҡы йылҡы ите менән өлөш, аҡ шоколадлы эремсек (ҡыҙыл эремсек), талҡандан кәнфит һәм эремсек соусы ҡушылған бауырһаҡ менән һыйланы.

*✓ Тиҙ арала яратмаған эшегеҙҙән китеп, үҙегеҙ лайыҡ булған ролегеҙҙе эҙләй башлағыҙ. Һеҙгә эш түгел, ә тормошоғоҙҙағы иң яҡшы мажара кәрәк! Әгәр үҙегеҙҙе табыуығыҙға шикләнәһегеҙ икән, тимәк, әле тапмағанһығыҙ!*





*Йондоҙ һәм Юлай Һөйөндөковтар.*

Һәр миҙалдың бер генә яғы булмағандай, кешенең үҙе тураһында ғына һөйләү бер ҡасан да тулы мәғлүмәт бирмәйәсәк. Юлай ағайымды уның яратҡан ғаиләһенән айырым күҙ алдына килтереү, әлбиттә, мөмкин түгел. Ағайымды ихтирам итеп итеп, уның хаҡында һүҙ алып барғанда һәр саҡ "минең Юлайым" тип кенә торған шаян ғына еңгәм бар минең. Йәмле Талҡаҫ күле буйындағы Иҫән ауылында тыуып үҫкән Йондоҙ исемле был еңгәм инде ҡырҡ биш йылдан ашыу (студент саҡтан алып) хәләл ефетенең ышанычлы терәге булып, тормош йөгөн уның менән бергә тартып килә. Бик һирәк осрай торған был исемде уға атаһы ағынан туғанлығы булған халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тәҡдиме буйынса ҡушҡандар. Башҡорт Дәүләт педагогия институтының тарих факультетын тамамлағас, еңгәм дә медицина училищеһына эшкә тәғәйенләнде, шунда 34 йыл буйы арымай-талмай, студенттарға тарих һәм философия фәндәрен өйрәтте. Тырыш хеҙмәте өсөн уға 2009 йылда Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов указы менән "Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре" тигән юғары исем бирелде. Тағы бер аҙҙан, ул "Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы" тигән исемгә лә лайыҡ булды.

"Урал", "Буранбай", "Ильяс" һәм башҡа күп кенә башҡорт халыҡ йырҙарын Юлай ағайыбыҙ һуҙып ебәрһә, күптәр күҙ йәшен тыя алмай. Заманында йырауҫы булған атайыбыҙ мәрхүмдән күсәндәр уға быңдай һәләт. Еңгәм дә йырға әүәҫ, үҙешмәкәр концерттарҙа ла ҡатнашырға өлгөрәләр. Бөгөнгө көндә инде хаҡлы ялда булған был яҡындарым ике бала (ул һәм ҡыҙ) тәрбиәләнеләр, өс ейәне үҫеп килә. Улдары Азамат БДУ-ның химия факультетын тамамлағас, контракт буйынса биш йыл офицер булып хеҙмәт итеп ҡайтты, хәҙерге көндә ситтә үҙ һөнәре буйынса эшләй. Ә ҡыҙҙары Айгөл юридик фәндәр кандидаты.

Ағай менән еңгәмдең күп тарафтан өлгөлө кешеләр булыуы атайәсәйебеҙгә, башҡа барлыҡ туғандарға булған мөнәсәбәтендә сағылыуы хаҡында ла әйтмәй ҡалдырыу ярамай. Атайыбыҙ донъя ҡуйғас, әсәйебеҙҙең ай-вайына ҡуймай, ауылдан Сибайға - үҙҙәренең йортона күсереп алып ҡайтты улар. "Ҡәйнәмде үҙебеҙ ҡарайбыҙ" тип, еңгәмдең ышанычлы итеп әйткән һүҙҙәрен әле булһа яҡшы иҫләйем. Ысынлап та, ғәзиз әсәйебеҙҙе тиҫтә йылдан ашыу ҡәҙер итте улар, "өрмәгән ергә лә ултыртманылар" тиһәм дә артыҡ булмаҫ! Шуның өсөн дә беҙ - бар туғандар ошо яҡындарыбыҙға ҙур рәхмәтлебеҙ.

Ғаиләлә биш бала үҫтек. Дүрт малай һәм бер ҡыҙ. Әлхәмдүлиллаһ, ошо көнгә тиклем барыбыҙ ҙа иҫәнбеҙ. Иң кесе ҡустыбыҙ Йәлил дә инде алтмыш дүртенсе йәш менән бара. Баш һүҙемде тигенгә генә "ағай кәрәк" тип атаманым: Барыбыҙ ҙа инде олпат йәштәрҙә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, әле булһа Юлай ағайым татыу ғаиләбеҙ өсөн ҙур кәңәшсе, хатта ниндәйҙер кимәлдә "старшина" булып тора тиһәм дә хата булмаҫ. Теге йәки был һорау килеп тыуа икән, йыш ҡына уның аҡыллы һүҙҙәренә мохтажбыҙ. Бына шундай "лидерлыҡ" һәләте бар уның.

Мәҡәләмде Әнғәм ағайҙың шиғыр куплеты менән башлап ебәргәйнем бит әле. Һүҙ аҙағында ана шул әҫәрҙең ҡалған өлөшөн дә тулыһынса килтерергә булдым. Уны оҡшатмаған бер кеше лә табылмаҫ тип ышанам:

*…Ағай кәрәк - ат һыртына*
*Тәү ҡабат менгән саҡта,*
*Яҡты донъяны ҡарайтып*
*Ҡайғылар килгән саҡта.*
*Ағай кәрәк - ҡарурмандан*
*Аҙашмай сығыр өсөн,*
*Уттарында янмай ҡалып,*
*Һалҡынға сыҙар өсөн.*
*Ағай кәрәк - тыйнаҡ ҡына*
*Аҡыллы һүҙе менән,*
*Әле йомшаҡ, әле усал*
*Ҡарашлы күҙе менән.*
*Ағай кәрәк - ҡай сағында*
*Барлығын тойоу етә,*
*"Мин ағайлы" тигән уй ҙа*
*Кешене ҡыйыу итә.*
*…Улдарымдың улдары бар,*
*Мин инде бабай, тимәк…*
*Аҡ мыйыҡлы бабайға ла*
*Барыбер ағай кәрәк!*
*Ағай кәрәк!*

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

# ТРАКТОРСЫ ҠЫҘ

**Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова үҙенең телеграм-каналында Әбйәлил районынан йәш тракторсы ҡыҙ менән таныштырҙы.**



19 йәшлек Алина Ғәлиуллина районың "Ҡыҙыл Башҡортостан" ауыл хужалығы предприятиеһында эшләй. Ҡыҙ һөнәрен икеләнмәйенсә һайлаған, сөнки хәҙер инде был ғаилә эшенә әйләнгән. "Уның олатаһы, атаһы, ағаһы - бөтәһе лә тракторсылар, - тип хәбәр итте министр. - Баймаҡ колледжын тамамлағандан һуң Алина Хеҙмәт министрлығының мәшғүллек хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеп, эш эҙләүселәр өсөн маҡсатлы социаль ярҙам программаһында ҡатнаша. Социаль контракт төҙөгәс, эше лә табыла, эшкә урынлашҡандан һуң тәүге айҙарҙа һиҙелерлек финанс ярҙамы күрһәтелә".

Ҡыҙ "Ҡыҙыл Башҡортостан" предприятиеһында үткән йылдың сентябренән алып эшләй. Ул эшен бик ярата, аҙҙы көтә. Әле бригадаһы менән техниканы сәсеүгә әҙерләй. Коллегалары ла араларындағы берҙәнбер ҡыҙға иғтибарлы, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торалар.

# ӘЙҘӘГЕҘ, ФОНОГРАММАҺЫҘ...

**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмил Бәҙәмшин - Махсус хәрби операция зонаһында яугирҙар алдында йыш сығыш яһаған мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең береһе.**

Уның әйтеүенсә, ул сентябрҙән алып патриотик рухтағы 32 концертта ҡатнашҡа. "Был концерттарға республика ҡала һәм райондарынан артистарҙы йәлеп итәм. Үкенескә ҡаршы, уларҙың күбеһе фонограмма аҫтында сығыш яһай. Миненсә, был - йырсылар тарафынан тамашасыларға ҡарата хөрмәт күрһәтмәү. Мәҙәниәт буйынса советҡа артистарға фонограмма аҫтында сығыш яһауҙы тыйырға, тип тәҡдим итәм", - тип белдерҙе Рәмил Бәҙәмшин. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров фекеренсә, ҡарар ҡабул итеү өсөн барыһынан да элек Мәҙәниәт министрлығы ағынан экспертарҙың проблеманы анализлаған профессиональ фекере, совет ағзалары менән мотлаҡ консультация үткәреү кәрәк. Бары шунан һуң ғына ниндәйҙер ҡарар ҡабул итергә мөмкин.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Был тормошта үҙегеҙҙең ролегеҙҙе аңлап, уны уйнай башлағандан һуң, аҡса үҙенән-үҙе ағылыр. Икенсе төрлө әйткәндә, ысын ролегеҙҙе ни тиклем яҡшыраҡ уйнайһығыҙ, шул тиклем сикһеҙ тәнегеҙҙең, йәғни, барлыҡ кешелек булдырған тәнегеҙҙең тотош уңышына булышлыҡ итәһегеҙ, уның сәләмәтлеген нығытып, унан күберәк энергия алаһығыҙ.

Аҡсаны ҡан биреү менән сағыштырырға мөмкин. Үҙенең бурысын һәҙемтәле башҡарған күҙәнәк даими рәүештә кислородҡа бай яңы ҡан менән тула. Организм үҫһен өсөн ҡан алмашынып торорға тейеш. Берәй ваҡыт ҡанға ҡытлыҡ булып китер тип, күҙәнәктең уны запасҡа һаҡлап ҡуйғанын күргәнегеҙ бармы? Шулай булһа, ул пенсия планына оҡшар ине.

Һеҙ үҙ ролегеҙҙе ни тиклем күберәк уйнайһығыҙ, маятник шул тиклем һеҙҙең яҡҡа ауыша. Тормошта үҙ урынығыҙҙы табып, һеҙ Йыһанға индергән өләшөгөҙҙө оптималләштерәһегеҙ. Ролегеҙҙе ни тиклем һәләтлерәк башҡараһығыҙ, шул тиклем ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшерһегеҙ. Иҫәпләүҙе, планлаштырыуҙы, үҙегеҙҙе һаҡларға тырышыуҙы туҡтатығыҙ. Үҙ ролегеҙҙе ҡабат-ҡабат уйнағыҙ. Үҙегеҙҙең урынығыҙҙы табығыҙ һәм тормоштан мөмкин тиклем күберәк һорағыҙ.

### Ләззәт

Тигеҙләмәнән аҡсаны алып ташлағыҙ. Улар яҡшы юл күрһәтеүсе түгел, улар бары тик ҡорал ғына. Уларҙы һуңғы маҡсат итеп ҡуймағыҙ. "Әгәр донъялағы барлыҡ аҡсаларға эйә булһам, инвестиция эшләй башлар инем", - тимәгеҙ. Һеҙ аҡсаларҙы барлыҡҡа килергә мәжбүр итә алаһығыҙ, шулай булғас, ни өсөн ниндәйҙер инвестициянан килем алырға тырышырға? Кемдер кеүек, "Донъялағы барлыҡ аҡсаларға эйә булһам, бер нәмә лә эшләмәҫ инем", тип тә уйапламағыҙ. Әгәр бер нәмә лә эшләмәһәгеҙ, әс бошоуҙан үлерһегеҙ. Хаҡлы ялға сығыу - бөтөүҙең башы. Әлбиттә, мин был турала әйткәндә тормошоғоҙҙағы ысын ролегеҙҙе күҙ уңында тотам, ә аҡса өсөн эшләп ултырған әлеге эшегеҙҙе түгел. Шуға күрә тиҙ арала яратмаған эшегеҙҙән китеп, үҙегеҙ лайыҡ булған ролегеҙҙе эҙләй башлағыҙ.

Һеҙгә эш түгел, ә тормошоғоҙҙағы иң яҡшы мажара кәрәк! Тормошта үҙ урынығыҙҙы табыуығыҙҙы нисек аңларға була? Ул ләззәткә тиң! Әгәр үҙегеҙҙе табыуығыҙға шикләнәһегеҙ икән, тимәк, әле тапмағанһығыҙ!

### Эшкә тотондоҡ! Бер, ике, өс - башланыҡ!

Хәҙер һеҙҙең төп көсөгөҙ тулыһынса хәрби әҙерлектә тора. Һеҙ дөрөҫ фекер йөрөтөргә, дошмандарығыҙҙы танырға өйрәндегеҙ, арҡаҙаштарығыҙ менән таныштығыҙ. Эшкә тотонорға ла ваҡыт. Артабан мин һеҙгә хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн кәрәк булған икенсе саралар менән таныштырмаҡсымын. Тәү сиратта, әйткәндәргә артыҡ мәғәнә һалмағыҙ, улар ғәмәлдәрҙән башҡа бер ниндәй ҡиммәткә эйә түгел. Һеҙ нимәләр эшләргә, ниндәйҙер ғәмәл башҡарырға тейешһегеҙ. Ҡыбырлағыҙ һәм хаталаныуҙан ҡурҡмағыҙ. Шуға күрә ваҡытты һуҙмағыҙ һәм ниндәйҙер хыялығыҙҙы тормошҡа ашырырға ярҙам итә алған кемгә лә булһа шылтыратығыҙ. Ә әлегә мин ситтән генә күҙәтәм, кәрәк булһа, уңайлы урынығыҙҙан һөйрәп сығарыр өсөн кире ҡайтырмын. Сөнки мин был тормошта үҙ ролемде таптым: һеҙҙе "типкеләп" торам!

**Пьер МОРАНСИ.**

✓ *Планетабыҙҙа диңгеҙ һөтимәрҙәренең 119 төрө һаҡланған. Әммә күбеһенә бөгөн юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай. Китты ите өсөн генә түгел, ә сәнәғәттә ягыулыҡ булараҡ файҙаланылған майы өсөн дә аулайҙар.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 19 ФЕВРАЛЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ КИТТАР КӨНӨ

**Йыл һайын Бөтә донъя диңгеҙ һөтимәрҙәрен яҡлау көнө йәки Бөтә донъя кит көнө билдәләнә. Уны 1986 йылда Халыҡ-ара кит аулау комиссияһы китҡа һунар итеүҙе тыйғандан алып байрам итәләр.**

Ер шарындағы диңгеҙ һәм океандарҙа һөтимәрҙәр кешенән күпкә алдараҡ йәшәй. Кит һымаҡтарҙың тарихы 55 миллион йыл элек башлана. Был төркөмгә киттар, дельфиндар, диңгеҙ сусҡалары кеүек һөтимәрҙәр төрө ҡарай. Өлкән киттарҙың оҙонлоғо 30 метрға, ауырлыҡтары 150 тоннаға етергә мөмкин. Ерҙәге иң ҙур хайуан - зәңгәр кит, ул 200 тонна тартыуы һәм 33 метр булыуы ихтимал.

Планетабыҙҙа диңгеҙ һөтимәрҙәренең 119 төрө һаҡланған. Әммә күбеһенә бөгөн юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай, сөнки уларға инде 200 йылдан ашыу әүҙем һунар итәләр. Китты ите өсөн генә түгел, ә сәнәғәттә яғыулыҡ булараҡ файҙаланылған ворвань - кит майы, кит мыйығы, бауыры, мейеһе өсөн дә аулайҙар. Уларҙан төрлө гормондар, шул иҫәптән инсулин, кашалоттың аш һеңдереү юлынан хушбуй эшләгәндә ҡулланылған гәмбәр алалар.

Киттарға һунарҙы яйлау йәһәтенән халыҡ-ара хеҙмәттәшлек 1931 йылда уҡ башлана. 1946 йылда Халыҡ-ара кит аулау комиссияһы булдырыла һәм уға 88 ил инә, шул иҫәптән Рәсәй. Комиссия урындағы халыҡтың һәм коммерцияға ҡоролған һунарҙарҙы сикләй. Ә бына ғилми маҡсаттарҙа һунар итеүҙе контролдә тотмай. Абориген һунар Чукотка, Гренландия, Аляска, Сент-Винсент һәм Гренадиндар утрауының урындағы халҡына рөхсәт ителгән. 2019-2025 йылдар өсөн Рәсәйгә һәм АҠШ-ҡа 392 Грендландия китына (йылына 67-гә тиклем) һәм 980 һоро китҡа (йылына 140-ҡа тиклем) квота бирелгән. Ә бына коммерцияға ҡоролған кит аулау менән Халыҡ-ара комиссияға инмәгән, мораторийға ҡаршы илдәр шөғөлләнә. Сәнәғәт өсөн Исландия, Норвегия һәм Япония аулай. Исландия йылына 209 финвал, 217 полосатики үлтерә. Норвегия балыҡсылары иһә, үҙҙәре билдәләгән квота буйынса йылына 917 кит тота ала. 2022 йылда улар 580, 2021 йылда 575, 2020 йылда 503 кит үлтергән. Япония - "Ниссин-Мару" тигән кит итен эшкәртеү буйынса йөҙмә аулау базаһы булған донъялағы берҙән-бер ил.

Рәсәйҙә Бөтә донъя кит көнө - бик әһәмиәтле байрам һәм 2002 йылдан алып билдәләнә. Сөнки илебеҙ сиктәренә ҡараған һыуҙарҙа бик күп төр диңгеҙ һөтимәрҙәре йәшәй, күбеһе Ҡыҙыл Китапҡа индерелгән. Улар араһында 32 төр кит бар, шуларҙың 20-һе Рәсәйҙең Ҡыҙыл Китабына ингән. Шулай уҡ ишкәк тәпәйлеләргә ҡараған диңгеҙ һөтимәрҙәре лә яҡлауға мохтаж.

1

Уның температураһы 36.6

2

Ғүмере буйы 33 тонна углекислый газды эшкәртә алыусы

3

Камчатка ҡондоҙо

4

Һуғар тешле ишкәк тәпәйле

Уҡ башы. Шартлатҡыс матдә. Р. Нуриев сәнғәте. Килгән кеше. Татарстан етәксеһе. 1. Боронғо яу ҡоралы. Сәс яҙғыс. Ҡәйнешкә еңгә булөгө. 5. Баш кейеме. Ут кисҙеге. "Аяҡ аҫтынан сыҡҡан йыландан һаклан, Аяҡ аҫтынан сыҡҡан (...)нан һаклан". Тыуған төйәк. "(...) ағас ботаҡҡа үҫер". 6. 7. 3. Тибет монахы. 4. "Карт (...) бураҙнаны боҙмай". Туристың схемаһы. Таш оҫтаһы. Арктикалағы аҡ йыртҡыс. Йөк көмәһе. 2. Ҡош. Нота. Италиялағы йылға. "Буласаҡҡа (...) юҡ". Ҡарлы ел. Емеш ағасы. Иҫ юйғанда еҫкәргә. Егелгән кеше. Ғәйепһеҙлек билдәһе. Ситтән алынған тауар. Музыканттар коллективы. Бала табыуҙы кисектерә алған һөтимәр. 8. Донъя тарафы. Ҡояш аллаһы. ⌘

5

Дельфиндар ғаиләһенән йыртҡыс

6

Ҙур башлы тешле кит

7

Сиреналар отрядынан булған хайуан

8

Байкалдағы берҙән-бер һөтимәр

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Осҡон. Хәкимов. Астроном. Камали. Халыҡ. Ауыҙ. Мәрәкә. Өлгө. Ир. Тирәк. Һинд. Өлкә. Ишәк. Мәрмәр. Ватан. Үрәсә. Әләм. Уҡ. Серов. Олон. Әрйә.

**Вертикаль буйынса:** Халиҡов. Аулаҡ. Һөт. Ҡарт. Инә. Хлор. Лавров. Оран. Сәкмән. Күмәс. Өкө. Еҙнә. Миҙал. Әҫәр. Неон. Обой. Килмөхәмәтов. Һорау. Ат. Искәндәров.

САНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 февраль "Ат уйнатып алдан бара"** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**22 февраль "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**23 февраль "Джут. Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 февраль "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт. 12+
**"Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 11.00 12+
**22 февраль "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 16.00 12+
**23 февраль "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 12.00 6+
**25 февраль "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 февраль "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+
**22 февраль "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин). 18.00 0+
**23 февраль "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 15.00 0+
**24 февраль "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 15.00 0+
**25 февраль "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 февраль "Anima"** фортепиано өсөн трио. 6+
**21 февраль "Йәшә"** Х. Әхмәтовтың тыуыуына 110 йыл. 6+
**22 февраль** Р. Хәмиҙуллин һәм П. Домбровский концерты. 6+
**24 февраль "Романтическое рандеву"** лаунж-концерт. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 16+
**24 февраль "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20 февраль "Память в объятиях моих"** (З. Усманова), пластик спектакль. 13.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 февраль "Сәрби"** сыуаш эстрада-фольклор ансамбле концерты. 6+
**22 февраль "Театр ҡунаҡханаһы"** музыкаль-программаһы. 6+
**23 февраль "Эх, күгәрсенкәйҙәрем…"** (Ф. Буләков), комедия. 18.00 12+
**24 февраль "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+
**25 февраль "Где музыка берет начало"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Әсәй, бына һиңә килен...дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**21 февраль "Ғаиләлә тыуған телгә ҡарата нисек һөйөү тәрбиәләргә?"** - түңәрәк ҡор. 11.00 12+
**"Музейная мозаика"** оҫталыҡ дәресе. 15.00 6+
**22 февраль "Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов"** сара. 15.00 6+
**23 февраль** Һалдаттар өсөн асыҡ ишектәр көнө.
**24 февраль "Музей буйынса экскурсия".** 15.00 0+

✔ *Ул үҙенсәлекле, киң диапазонлы тауышы менән халыҡты таң ҡалдыра. Ул ниндәйҙер серле лә, сәйер ҙә кеше. Ниндәйҙер бер өйрәнеп бөтөлмәгән фән, аҙағына тиклем уҡылмаған китап һымаҡ.*



АФАРИН!

# ЙӨРӘГЕ ТУЛЫ ЙЫР

**Ул йырға ғашиҡ. Уның йөрәге тулы йыр-моң. Сәнғәткә булған һөйөүенән ҡасып, көтөүсе лә булып ҡарай, тракторға ла ултыра, шахтаға ла төшә... Әммә ул ҡайҙа ғына йөрөмәһен, йөрәгенә тулған көй-моң, күңелен ҡанатландырған илһам ҡошо уны ташлап китергә уйламай. Һөҙөмтәлә, ул үҙ-үҙенән ҡасып булмауына, йыр-моңдан айырыла алмауына төшөнә.**

Бына шундай ҡыҙыҡлы сценарийға ҡоролған "Йөрәк тулы йыр булғас" концерты. Был шәп тамашаның төп геройы - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Сибай концерт-театр берекмәһе солисы Ғаяз Ғәйетбаев. Яңғыҙ концертында Ғаяз йырлай ҙа, бейей ҙә, гармунда ла уйнай, тамашасыларҙы көлдөрә лә, хатта илата ла.

Ғаяз Ғиниәт улы Ғәйетбаев 1980 йылдың 28 ғинуарында Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуған. Таланттар төбәге Буранбайҙа бит сабыйҙар илап түгел, йырлап тыуа, тиҙәр. Йырлап тыуғас, йырлап йәшәйҙәр ҙә, йыр-моңон башҡаларға бүләк итәләр, дан ҡазаналар. Ғаяз да Сибай филармонияһында 2002 йылдан алып эшләй. Әле ул Сибай концерт-театр берекмәһенең алдынғы артист-вокалисы, солисы, 2021 йылдан Башҡортостандың атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исем йөрөтә. Ҡала, республика кимәлендәге күләмле мәҙәни саралрҙы алып барғаны, тел, милләт, рух һағындағы йәмәғәт эшмәкәрлеге Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының "Ал да нур сәс халҡына" миҙалы менән баһаланған.

- Ғаяз Ғәйетбаев моңло тауышлы йырсы ғына түгел, оҫта актер ҙа, нәфис һүҙ оҫтаһы ла. Ул тамашасыларҙы халыҡсанлығы, башҡорт халыҡ йырҙарын үҙәккә үтерлек, халҡыбыҙҙың аһ-зарҙарын ишетерлек, тойорлоҡ итеп башҡарыуы менән әсир итә, - ти уның хаҡында Сибай концерт-театр берекмәһе директоры вазифаһын башҡарыусы **Азат Арыслан улы Нәбиуллин.**

Уның һүҙҙәрен берекмәнең музыкаль етәксеһе **Лилиә Солтанова** ла ҡеүәтләй.

- Ғаяз Ғәйетбаев ҡатмарлы һәм төрлө жанр йүнәлешендәге репертуарҙы: патриотик тематикалы, заманса эстраданан алып вокаль-хор классикаһының ҡатмарлы әҫәрҙәрен дә башҡара алыуы менән башҡаларға үрнәк. Йырлаған йырҙарына етди, грамоталы ҡарай, ҡабатланмаҫ художестволы образ тыуҙыра, башҡарыусы ғына түгел, артист булараҡ та үҙен сәхнәлә тота белә, - тип маҡтай йырсыны Лилиә Сәлим ҡыҙы. - Башҡорт халыҡ йырҙарын урын-еренә еткереп башҡарып ҡына ҡалмай, уларҙың тарихтары менән дә ҡыҙыҡһына. Һирәк башҡарылған йырҙарҙы эҙләп табып, шуларҙы йырларға тырыша. Уның менән халыҡ йырҙары тураһында һөйләшә башлаһаң, оҙон бер әңгәмәгә әүерелә. Сөнки ул шул тиклем күп белә, йөрәге тулы йыр ғына түгел, хазина һандығы ла. Фольклор менән ныҡ ҡыҙыҡһына.

Коллегалары ла уның хаҡында тик яҡшы фекерҙә.



- Ғаяз менән беҙ курсташтар, Сибай сәнғәт училищеһында 1998 йылдан алып бергә уҡыныҡ. Бына хәҙер 22 йыл филармонияла эшләйбеҙ. Гастролдәргә бергә йөрөнөк, әле лә бергә сығабыҙ. Артист булараҡ та, кеше булараҡ та, уны ныҡ ихтирам итәм, - ти Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Рөстәм Хәсәнов.**

- Ғаяз Ғәйетбаев менән 15 йылға яҡын бергә эшләү дәүерендә бик күп юлдар үтергә, бергә йырларға тура килде. Ул үҙенсәлекле, киң диапазонлы тауышы менән халыҡты таң ҡалдыра. Ул ниндәйҙер серле лә, сәйер ҙә кеше. Ниндәйҙер бер өйрәнеп бөтөлмәгән фән, аҙағына тиклем уҡылмаған китап һымаҡ. Гармунда уйнап йырлауын бик оҡшатам. Балаларына яҡшы атай булыуына һоҡланам, - ти **Фаил Йортбаҡов.**

- Үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ моңға эйә Ғаяздың ауланаһы үрҙәре алда әле! Халыҡ уны ярата, тыңлай, алҡыштарға күмә, сәскәләр бүләк итә, ҡушылып йырлай, һағышлана, моңлана. Бәрхәт баритон тауышлы йырсыбыҙҙың маҡтаулы исемдәре артһын, халыҡ йырсыһы булып китергә яҙһын! - ти **Айгөл Әсәҙуллина.**

- Зәңгәр күҙле, шаян, моңло тауышлы Ғаяз Ғәйетбаев менән 7 йыл бергә эшләйем. Ошо дәүерҙә ике дуэт - Н. Нәжми һүҙҙәренә Р. Хәсәнов ижад иткән "Йөрәктән булһа", "Таһир һәм Зөһрә" йырҙарын башҡарҙыҡ. Йырҙы башҡарыу оҫталығы юғары булғанғалыр, уның менән йырлауы рәхәт. Шаянлығы, шуҡлығы ла бар, - ти **Зәбирә Әминева.**

- Хеҙмәттәштәрем араһынан минең һәләтемә, мөмкинлегемә ышанған кешеләрҙең береһе ул Ғаяз Ғәйетбаев. Ул мине дәртләндереп, ҡанатландырып ебәреүсе лә. Уның концертында ҡатнашыуыма, уның менән дуэт йырлауыма бик шатмын. Мин уны остазым тип тә һанайым, уның ағайҙарса хәстәрләүенә һөйөнәм. Яңынан-яңы үрҙәр яулауын, сағыу концерттар сығарыуын теләйем! - ти йәш йырсы **Зәриә Рыҫмөхәмәтова.**

Әйырсы үҙе тураһында шуларҙы һөйләне: "Мин бәләкәйҙән йырлайым. Ауылда уҙғарылған ниндәйҙер сарала "Кәркәлә тауҙары"н йырлап торғанымды хәтерләйем. Беҙ ғаиләлә 5 бала, мин кинйә. Өлкән ағайым Әхиәт Ғиниәт улы - Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, ҡурайсы. Бер генә апайым бар, ул бик шәп хужабикә. Икенсе ағайым ауылда тора, һөнәре буйынса мал табибы. Йырларға ярата. Өсөнсө ағайым Сибай сәнғәт колледжында эшләй, әммә мәҙәниәт кешеһе түгел, физкультура уҡытыусыһы. Атайым менән әсәйем мәрхүмдәр ҙә йырға маһир булды. Атайым гармунда ла, скрипкала ла, мандолинала ла уйнаны, бик матур йырланы. Әсәйемдең дә тауышы матур булды.

Шундай ғаиләлә үҫкәс, күрше Сынғыҙ мәктәбендә 11-се класты бөтөү менән Өфөгә юлландым, Өфө сәнғәт институтының театр бүлегендә өс ай уҡығас, әрмегә саҡыра башланылар. Хәрби комиссариат саҡырыуы менән баш ҡаланан Баймаҡҡа бер нисә ҡат ҡайтырға тура килде. Сәләмәтлегем торошо буйынса хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тигәстәр, кире баш ҡалаға барманым, Сибайҙа тороп ҡалдым да Сибай сәнғәт училищеһының йыр бүлегендә уҡыуымды дауам иттем. Камил Вәлиев класында 4 йыл уҡыным. Хеҙмәт юлымды Баймаҡ район мәҙәниәт йортонда башланым, унан Сибай филармонияһына килдем. Халыҡ һәм ретро йырҙарға өҫтөнлөк бирәм.

Ҡатыным Рәзилә Хәснулла ҡыҙы менән Сибай филармонияһында танышып, өйләнештек. Ул "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисткаһы булды. Балалар тыуғас, икебеҙгә лә гастролдә йөрөү ҡыйынға тура килде. Шуға ла ул Иҫке Сибай музыка мәктәбенә эшкә барҙы. Хәҙер инде оҙаҡ йылдар шунда эшләй, "Атайсал" өлгөлө балалар ансамблен етәкләй. Бик күп сығыш яһайҙар. Быйыл "Шайморатов вариҫтары" киң күләмле проект менән Президент фондынан мәҙәниәт инициативаларын үҫтереүгә грант алыуға өлгәштеләр. Аҡсаға музыка мәктәбенә милли кейемдәр, музыкаль инструменттар һатып алдылар.

Өс балаға атаймын. Өлкән улым Ғәзиз Баймаҡ ауылыҡ-энергетика колледжында белем ала. Икенсе улым Исламетдин Сибай ҡалаһының Р. Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейында 5-се класта уҡый. Сәлимә ҡыҙыма 5 йәш, балалар баҡсаһына йөрөй. Ҙур, күркәм йорт һалып индек..."

Шулай итеп, Ғаяз Ғәйетбаев инде күптән ир-корона инеп, Сибай ҡалаһында ныҡлы төпләнһә лә, тәүге һулыш алған, тәпәй баҫҡан мәлдәрен, вайымһыҙ бала сағын, тыуған яҡтарын, ата-әсәһе йәшәгән төп йортто, туғандарын, яҡындарын һағына. "Йөрәк тулы йыр булғас" тип исемләнгән шәп концертында ла тап шул күңел түренән, йөрәгенән сыҡҡан йырҙарын аһәңләнеп, моңланып башҡара ла инде йырсы. Быны Башҡорт дәүләт филармонияһында үткән концертта Өфө тамашасыһы ла һиҙмәй булмағандыр, тип ышанайыҡ.

**Гөлдәр ҠАДАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ АУЫҘЫНА...

## мисәт баҫып булмай

Илле яулығың булһа ла, ил ауыҙын тыға алмаҫһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт бик борсолоп Остазы эргәһенә килә һәм: "Хөрмәтле Остазым, бергә уҡыған шәкерттәр ниңәләр миңә ҡырын ҡарай һәм был минең тормошомдо түҙеп торғоһоҙ итә. Ошо мөнәсәбәтте нисек үҙгәртергә була, әллә Һеҙ миңә артабан да түҙергә ҡушаһығыҙмы?" - тип һорай. "Был мәсьәләне еңел генә хәл итәбеҙ, - ти Остаз. - Дәрес ваҡытында һин минең эргәмә кил һәм ҡолағыма шыбырҙаған бул. Мин дә һиңә яуап итеп шыбырлаған булырмын..."**

**Шулай итәләр ҙә. Был күренеш шунда уҡ бар шәкерттәрҙең дә ҡыҙыҡһыныу үҙәгенә әйләнә. Күпмелер ваҡыттан һуң улар Остазға мөрәжәғәт итә: "О, беҙҙең Остазыбыҙ! Яраткан шәкертегеҙ менән нимә хаҡында шыбырлашыуығыҙҙы беҙгә лә әйтмәҫһегеҙме?" Остаз шәкерте менән шыбырлашыуҙың йөкмәткеһен әйтеп бирә:**

**- Һин үҙеңдең таҫрайған күҙҙәреңдә йәшерә алаһыңмы? - тип һораным.**

**- Әйе, - тине ул.**

**- Һин күпме аҡса эшләнең? - тип һораным.**

**- Ун һум,- тине ул.**

**- Күпмеһен юғалттың? - тип һораным.**

**- Биште, - тине ул.**

**- 32-һе лә өйҙәме?- тип һораным.**

**- 29-ы ғына өйҙә, - тине ул.**

**Остаздың был хәбәренән бер ни ҙә аңламаған шәкерттәр тамам аптырап ҡала. Шунан улар аңлатыуҙы һорап, Остаздың яраткан шәкертенә мөрәжәғәт итә.**

**- Барыһы ла ябай ғына, - ти шәкерт.- Остаз һеҙҙең ваҡ-төйәк менән булғанығыҙҙы белә, шуға ла һеҙгә һабаҡ бирергә теләне. Һеҙ Уның минең менән шыбырлашыуҙы миңә булған иғтибар билдәһе тип ҡабул иттегеҙ һәм миңә мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәрттегеҙ.**

**- Ләкин һеҙҙең был серле диалог ниҙе аңлата һуң?- тип ныҡыша шәкерттәр.**

**- Мин ун һум аҡса эшләгәйнем, уның биш һумын улымдың уҡыуына тотондом, - ти шәкерт.**

**- Ә 32 һаны, моғайын да, ниндәйҙер мөһим иҫәпте белдерәләр?**

**- Минең 32 тешем бар ине, 29-ы ғына тороп ҡалды...**

**- Улай булғас, һин беҙгә иң тәүге һорауҙың мәғәнәһен аңлат, - ти тамам аптырауға ҡалған шәкерттәр.**

**- Таҫрайған күҙҙәр - улар һеҙҙең күҙҙәр. Улар ҡомһоҙлоҡтан таҫрайған. Мин һеҙҙә ҡыҙыҡһыныу уятып, күҙҙәрегеҙҙең таҫрайыуын бөтөрҙөм. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һина ваҡ-төйәк менән булышыусыларҙы үҙгәртә ала.**

**- Был хәлдән беҙ ниндәй һабаҡ алырға тейеш һуң? - ти шәкерттәр тәрән борсолоу менән.**

**- Һабаҡ шундай: ҡомһоҙлоҡ, матди донъяла ла, рухи донъяла ла бәләкәй генә ҡәнәғәтләнеү бирә. Әммә ул һеҙгә артабан камиллашырға, юғары аңды үҫтерергә ҡамасаулай. Ҡомһоҙлоҡтан ҡотолдороу өсөн һеҙҙең уй-фекерҙәрҙең ваҡ-төйәк эргәһендә буталыуын күрһәтергә кәрәк ине..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСИ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02.
(453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 февраль 15 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111383